**Йыһат Солтанов**

# ҠАЙҺЫ БЕР ИҪТӘЛЕКТӘР



**ӨФӨ -- 2017**

# РӘМИГӘ 85.

Шағир был донъянан киткәс, уның яҡты иҫтәлеген мәңгеләштереү өсөн, тол ҡалған хәләл ефете Надежда Васильевна күп көс һалды. Республиканың төрлө матбуғат органдарында төрлө кешеләрҙән килгән хәтирәләр күбәйеп, эҫе мәлендә шуларҙы бер йыйынтыҡҡа туплау, китап итеп нәшерләү бурысы тора ине, быны мәрхүмдең «иң ғәзиз дуҫтары» итеп үҙҙәрен иғлан ҡылған шау-шоулы төркөм ҡәләмдәштәре күтәреп алырға тейеш ине. Әммә береһе лә ҡуҙғалмаҫ булғас, ҡобараһы осҡан Надежда Васильевна миңә килде, изге бурысты йөкмәүемде үтенде.

-- Даны арта барған һайын, Рәмиҙең «иң-иң яҡын шәкерттәре», «йән дуҫтары» ыраны, беренсе сиратта шуларға өндәшергә кәрәк, -- тип, тәғәйен исем-фамилияларын атағайным, Надяның төҫө ҡасты, «мөрәжәғәт иттем, ҡара эште береһе лә алмай, инде һин генә ҡалдың», тине. Бер һүҙһеҙ ризалыҡ биргәс, «араһына үҙеңдең дә иҫтәлегеңде яҙып керет, ныҡ дуҫтар булдыҡ», тип үтенде. «Юҡ, мин ул «иң-иң»дәр менән бер ҡыйыҡ аҫтында ҡалырға теләмәйем. Ҡатмарлы осорҙа йәшәнек, еңел-елпелекте күңелем тартмай. Шағир яҙмышына бәйле, документаль әйбер түгел, ә художестволы әҫәр яҙырмын», тинем. Аллаға шөкөр, вәғәҙәләремде үтәп, «Халыҡ шағиры Рәми» тигән ҡалын китап ҡулъяҙмаларын баштан-аяҡ нәшриәткә әҙерләп биреп сығарыштым, «Шағир йондоҙо» тигән драмамды яҙҙым, тик үкенес, һуңғыһын Надябыҙ күрә алмайынса китте (күберәк белергә теләүселәр драманы түбәндәрәк теркәлгән файлдан асып уҡыр)...

Бөгөнгөһөн төрлө-төрлө ҡиәфәттәге ҡәләмдәштәр, шау-гөр килеп, зыяратҡа «85 аҙым» тигәнерәк ялтыраууыҡ-театраль уйын һыаҡ нәмә ҡороп ебәрҙе (ә мәрхүм ундай яһалмалылыҡтарҙы яратмай ине), бәлки, заманаһына күрә был да кәрәктер. Ә 1977 йылдың февралендәге Рәмиҙең ысын һуңғы юлына бағышланған хәтирәм әле алдығыҙҙа.

## Рәмиҙең һуңғы юлы

(«Эскерһеҙҙең тормошо» тигән хәтирәләр китабымдан өҙөк)

***"Йыһат ҡорҙашыма – һин йәшәгәнгә мин бәхетле!***
***Йәшәйек әле, йәшәйек!***

***Дошмандың эсе китеп ятһын!***
***Ни ҙә булһа әйтербеҙ!..***
***70-енсе йыл, 9/I – (ҡанлы көн икән...)”.***

Рәми Ғарипов. Иҫтәлекле автограф.

1977 йыл миңә, ғөмүмән, башынан уҡ йөрәк өҙгөс шәхси ҡайғылар килтерҙе. Февраль айында мәктәпкә киткән Сабит улым урамда шағир Тимер Йосоповты осратып, ҡорҙашым һәм дуҫым Рәми Ғариповтың һис көтмәгәндә ҡапыл вафат булыуы хәбәрен алып ҡайтҡас, тетрәнеп, өйҙән сығып йүгерҙем...

Үлеренән ике йыл элек кенә тап килешкәндә, алдыма ҡуйған рюмкаһын кире этәреп, өҙә ҡырҡып әйткәйнем: «Эсеүҙе ташлайыҡ, ҡорҙаш. Һаман былай барһаҡ, түҙә алмаясаҡбыҙ — үләсәкбеҙ бит. Мин үҙем ташланым, һиңә лә бөгөндән ташларға кәңәш итәм». — «Юҡ инде, — тип ҡырт өҙҙө дуҫым, — эсеүем — эсеү, мин уны ташламаясаҡмын!» Әйткәндәй, яҙыусы Б.З. Рафиҡов та «хәмер командировкаһынан» тамам төҙәлеп, «Ағиҙел»дә мин, Абдулхаҡ ағай Игебаев ултырған бүлмәлә өсөнсө иптәш сифатында әүҙем эшләй башлағас, ошоға оҡшаш кәңәште ысын күңелдән уға ла биргәйнем. Эш шунда: иртәнсәк һуңлабыраҡ килһәм, яңы хеҙмәттәшебеҙ яңғыҙы (Абдулхаҡ ағайҙың өйҙә ижад көнө ине) хозурланып, түшәмде күтәртерлек итеп тәмәке бороҙлатып ултыра, төтөнө балта аҫырлыҡ ҡуйы.

Һөйләшеү ҡыҫҡа булды: «Абау, ниндәй зәхмәт ояһы был?!. Үләһең бит былайһа — ташла тәмәкене!» — «Ю-у-уҡ инде, — тине һуҙып, — ташламайым! Донъялағы берҙән-бер ҡыуанысым бит ул минең!» (Һәм шул «ҡыуаныс»ы әҙәмде ваҡытынан элек фани донъянан алып китте – тамағында рак менән)...

Ә Рәми менән булған баяғы һөйләшеүҙә, уның ҡырҡа яуабынан күңелем бик ныҡ ҡайтып: «Улайһа мин бынан һуң һинең яныңа килмәйәсәкмен, сөнки, нисә генә ҡарама, янында — “шәкерттәрең” тигән эскесе өйөр, алдыңда хәмерле шешә!..» — тип асыуланып сығып киттем дә, ысынлап та, уға барып йөрөүемде туҡтаттым; осраҡлы тап килешеүҙәр ҙә ҡыҫҡа ғына һөйләшеүҙәр булғылай ине. Эшенән һуңғы тапҡыр ҡыуылыуына тиклем бер арала ул йәнә «Башҡортостан ҡыҙы» журналында баш редактор Рәкиә Рөстәмова ҡулы аҫтында хеҙмәткәрләнеп алды. Редакцияларыбыҙ матбуғат йортоноң бер үк ҡатында ине. Эш сәғәттәре аҙағынан бер кисәлә, яңы яҙған шиғырымды тотоп, эргәһенә кереп ултырҙым, бөтә халыҡ таралышҡан — икәүҙән-икәү генә оҙаҡ гәпләштек. Ул, бар ихласлығын һалып, киләсәктә кәрәк булырын алдан күреп, буғай, зәңгәр копировка аша (копияһын үҙендә ҡалдырырға) йәш шағирәләргә шиғриәт серҙәре буйынса йылы эстәлекле хаттар яҙып мауыға — бер-нисәһен уҡып та ишеттерҙе. «Кәтибә

апайҙан һуң был редактор менән эшләү ҡайһылайыраҡ?» — тип белешкәс, илар хәлгә етеп: «Их, әйтмә лә инде, ҡарт! Булыр ҙа булыр кеше, әммә былдай ҙа яуыз, ҡара йөрәкле булмаç! — тине лә, үткәндәрен иçләп, буғай, бер килке тын ултырғас: — Кәтибә апай менән бергә эшләү осоро, быныӊ менән сағыштырғанда, үҙе бер ожмах булған икән ул!» — тип өçтәне...

Рәми Ғарипов төптән үçкән имән кеүек таҙа кәүҙәле, бер сиргә лә бирешмәүсән зат булып, «үҙ ғүмеремдә бер тапҡыр ҙа поликлиника тупһаһын аша атлап кергәнем юҡ», — тиер ине. Тик аҙаҡҡы йылдарында ғына ваҡыт-ваҡыт йөрәгенеӊ тибеүҙән туҡтап тороуын (аритмиялыр?) һәм яӊынан эшләп китеүен йылмайып ҡына әйткеләп ҡуйһа ла, табиптарға күренгәне булманы. Тажикстанға һуӊғы оҙайлы сәфәрендә йөрөп ҡайтҡас, вагонда йоҡлап килгәнендә төшөндә кемдер йөрәгенә хәнйәр ҡаҙауҙан ҡаты һыҙланып уяныуын (моғайын, микроинфаркт кисергән) һөйләп тә шомландырҙы, әммә быға тейешенсә иғтибар итмәгәнлектән, төшө — төш кенә булып ҡалды ла онотолдо...

Рәми ҡорҙашым менән мин, бер үк йылда тыуған йәштәштәр генә түгел, ә фекерҙәштәр ҙә булыуыбыҙҙы артыҡ сурытып тормайым. Был хаҡта уныӊ үҙ ваҡытында миӊә бүләк итә барған китаптарындағы (уларҙы аҙаҡ шағирҙыӊ тыуған ауылындағы йорт-музейына тапшырҙым) автографтары ла тәрән мәғәнәле һөйләй:

Рәми Ғарипов. Таш сәскә. *Лирика*. Өфө, 1958. (Китаптыӊ корректураһы, коленкор менән тышлап төпләнгән). Титул битендәге автограф:

***“Йыһатҡа – ҡаным – Рәми. 15-16/VII. Өфө”.***

Рәми Ғарипов. Осоу. Шиғырҙар. Өфө, 1966. Автограф:

***“Йыһат ҡарт! Шағир, әҙип тик үҙенеӊ ғүмер юлында ҡаны менән бергә ҡушып бөтәһен татығанда ғына, шул ут йотҡандарын ҡағыҙға төрөп бирә белер теле булғандан, шул серҙе аӊлар иле булғандан ғына шағир-әҙип икәнен һин беләһеӊ. Шулай булғас, минеӊ һымаҡ күп ҡыуыҡ осормаçһыӊ, тим, дуçҡай. Көтәм. Ышанам! Рәми ҡартыӊ. 28/IV – 66”.***

Рәми Ғарипов. Аманат. Йырҙар, шиғырҙар, ҡобайырҙар. Өфө, 1969. Автограф:

***“Йыһат ҡорҙашыма – һин йәшәгәнгә мин бәхетле!***
***Йәшәйек әле, йәшәйек!***
***Дошмандыӊ эсе китеп ятһын!***
***Ни ҙә булһа әйтербеҙ!..***
***70-енсе йыл, 9/I – (ҡанлы көн икән...)”.***

Рәми Ғарипов. Горицвет. Уфа, 1969. Автограф:

***“Йыһат ҡартҡа – минең “знакум” һаҡалы[1], шулай ҙа сәс-һаҡал аҫтында беҙ икенсе бер донъя йөрөтәбеҙ.***
***Шул донъя иҫтәлеге!***
***Йәшәп ҡарайыҡ әле, -- Рәми. 13/II – 70”.***

Рәми Ғарипов. Аманат. Йырҙар, шиғырҙар, ҡобайырҙар. Өфө, 1969. Был китапты шағир Шакир Ғәлингә бүләк иткән, ә ул иһә, “Һаҡла” тиеп, миндә ҡалдырып торғайны, ун йыл үткәс (Рәми үлгәс) кереп алып китте. Шакирға яҙылған автограф:

***“Шакир ҡартҡа, -- һине күрһәм, халҡымдың ҡот осҡос талантын да күрәм, фажиғәһен дә күрәм; бәй, күргәс ни, үҙемсә көн күрәм, тик мин киткәс, юҡҡа-буҡҡа күҙйәш ҡойоп ултырмағыҙ, бура бурағыҙ, итәк тулы бала-саға үҫтерегеҙ!.. Ҡалғаны – Аманат! Рәми. 10/II – 70”.***

«Интернат-мәктәп» (хәҙерге Р. Ғарипов исемендәге гимназия) тупҡалышында «хрущевка» йортоноң беренсе ҡатындағы ике бүлмәле ҡыҫыҡ ҡына фатирында бала-сағалары ишәйеп һәм ҙурайып барһа ла, Яҙыусылар берлегенән киңерәк торлаҡ һорап ғариза яҙманы, сөнки быныһы өсөн дә фатир хаҡын айҙыҡын — айға үҙ ваҡытында түләргә хәле етмәй, йорттар идаралығы әленән-әле электр сымын өҙөү йәки йылы һыуҙы ябыу менән янаған хаттар ебәреп йөҙәтә ине. Ана шулай ғаризаһы булмауға ла ҡарамаҫтан, көтмәгәндә, Яҙыусылар берлеге рәйесе Әсғәт Мирзаһитов менән Литфонд директоры Зөлфәр Хисмәтуллин ағайҙар көндәрҙән-бер көндө Рәмиҙе үҙҙәре идараға саҡыртып алып, Рихард Зорге урамындағы туғыҙ ҡатлы яңы йорттоң етенсе ҡатындағы өс бүлмәле фатирға ордер тотторалар. Нигеҙ туйына бер килке яҡын ҡәләмдәштәре үҙ-ара иғәнә һалышып, кейем шкафы һ.б. нәмәләр алып барып ҡотланыҡ...

Бына шул ҡотло төйәгендә 1977 йылдың февралендә, үҙе донъяға килгән айҙа, Рәми яңғыҙы ҡала (тыуған көнөн дә балалары менән генә үткәрә) — ҡатыны Надежда Васильевна эше буйынса аҙна-ун көнгә Мәскәүгә командировка алып, бер ыңғайҙан Мәскәү янындағы Переделкино ҡасабаһына әсәһенең хәлен белергә киткән (тап шул көндә Рәми командировканан ҡайтып, улар икеһе Өфө аэропортында ҡыҫҡа ғына мәлгә осрашып аймылыша). Шағир тирәһендәге шау-шоулы өйөр (“шәкерттәре”), иркенлектән файҙаланып, һәр береһе шешә

---

[1] Мөнтәлеп сыҡҡан урыҫса китабына ҡәнәғәтһеҙлек белдерә.

ҡыҫтырып, тигәндәй, шағирҙы тыуған көнө менән ҡотларға эркелә, бисәһе юҡта өйҙә ҡоролған көслө тантана аҙна-ун көнгә һуҙыла...

Надежда Васильевнаның шул саҡтағы миңә сер итеп һөйләүенсә, ул Мәскәүҙән ҡайтып ингәндә мәжлес инде таралған, зал эсе — тәмәкенән ҡара һөрөм, өҫтәл өҫтөндә — күбәләй өйөлгән тәмәке төпсөгө һәм рюмкалар, ә кухня иҙәнендә буш шешәләр үтеп кергеһеҙ рәүештә тумарлап ята... Ә минең тоҫмаллауымса, моғайын, был хәлгә бәйле ир менән ҡатын араһында буран да ҡубынғандыр...

Ошо урында Рәмиҙең үҙ ҡулы менән яҙған күптәнге көндәлек кисерештәрен иҫкә төшөрөү урынлы: *«Йөрәк ауырта. Миңә инде был донъянан тайырга ла ваҡыт инде».* (Әҫәрҙәр, II том, 493-өнсө бит). *«Ниндәй генә нәжестә ҡойонһам да, ниңә һуң мин бер яҡтылыҡҡа, яҡшылыҡҡа, сафлыҡҡа ышанам икән! Бәлки, минең бөтә фажигәм дә шундалыр... Әллә минең бөтә ғүмерем ҡот осҡос бер хата микән? Ә үҙем: «Хаталар ҙа булыр тормошоңда,/Тик тормошоң хата булмаһын», — тигән булам. Инанам, яҙам. Бала саҡтан биреле ошо газаптарҙы кисерәм. Ниңә? Үҙеңдең бишегең тирбәлгән өрләктәге тырма тешендә йөрәгең туҡтаған кәүҙәң тирбәлеп тороу артыгыраҡ түгелме икән был донъяла?..* (Шағирҙың аҫылынып үлеү уйы ла булған, тимәк... — *Й.С.*). *Инде тегендә (эрәүергә) былай ҙа күп ҡалмаған, үҙ ҡулдарым менән һыҡмайынса ла шартлар был йөрәк»...* (Әҫәрҙәр, III том, 67-нсе бит). *«Осто донъя ситлегенән тарһынып күңелем ҡошо» (Ғ. Туҡай) — минең хәлгенәм ошо...*

*Онотмайым тыуган көнөмдө (онотмаҫ өсөн үлер көнөңдө).* [Тыуған көнөндә үлергә йыйынғандай... — *Й.С.*]. *Кешенең бөтә ғүмере ҡыҫҡа бер һыҙыҡҡа һыя: 1932 — 1999(?)»...* (Шунда уҡ, 71-енсе бит. Ләкин шағир аҙаҡҡы цифрында яңылышҡан – тукһан туғыҙғаса барып етмәне – 77-лә китте). *«Мин кешеләр өсөн йәшәйем — кешеләр мине аңламаны... Иртәгә миңә — 45. Өфө аэропортында миңә шул тиклем гәзиз тауыш исемемде атап ҡысҡыра: Надя.*

***Беҙ инде бөтөнләй ят кешеләр, тиерлек. Ләкин үтелгән ғүмер, ғүмеремдең үткән 21 йылы 21 хәнйәр булып йөрәккә ҡаҙала.***

*Тағы ла мин киткәндәгесә мәгәнәһеҙ һөйләшеү. Йөрәк өҙгөс әрнеү!..»* (Шунда уҡ, 76-нсы бит). Йөрәгем өшәнеп шуға иғтибар иттем: әле килтерелгән көндәлек биттәрендә үҙ-үҙенә ҡул һалыу теләге ярылып ята...

Һәр хәлдә, ҡатыны ҡайтҡандың кисенә үк Рәмиебеҙ йөрәге ауыртып йығылған; Надежда Васильевна, өйҙә телефон юҡлыҡтан, лифттағы микрофондан йорттар идаралығының диспетчерына өндәшеп, «тиҙ ярҙам» саҡырттырған һәм шағирҙы Туҡай урамындағы 1-енсе больницаға илтеп һалғандар. Надежда Васильевнаның әйтеүенсә, Рәми тарафынан бер ниндәй ҙә хәүеф-хәтәр һиҙелмәгән, фәҡәт тәмәке килтереүен генә үтенеп ҡалған... Шағирҙың баяғы үҙе

тураһында әйткәне аҡтыҡҡаса тура килеп, дауаханаға ул унының тупһаһы аша *атлап* инмәгән, ә күтәреп керетеп, күтәреп алып сыҡҡандар...

Әммә-ләкин, әммә-ләкин... күп йылдар буйына тынғы бирмәгән, таныш-белеш араһында быш-быш һөйләшелгән шомло риүәйәтте лә миңә байтаҡ ҡәләмдәштәремдән ишетергә тура килде... Һәм бына өҫтәлмә мәғлүмәт: шағир вафатынан һуң егерме ете йыл үткәс яҙып алынғаны:

21.03.2004.

Надежда Васильевна Ғарипова менән унының фатирында Рәмиҙең үлеме тураһында һөйләштем (шағир хаҡындағы иҫтәлектәр йыйынтығын баҫмаға әҙерләүем барышында ҡайһы бер материалдарҙы алырға барғайным).

Яҙыусылар союзы йүнәлтмәһе менән командировкаға киткән Рәми Урта Азиянан күпкә һуңлап ҡайтҡан, өҫтәүенә, өйөнә тура ҡайтмай, Баймаҡтағы никахһыҙ ҡатыны һәм ҡыҙы янында булған... Надя эше буйынса Мәскәүгә командировкаға ебәрелеп, аэропортта самолетҡа ултырырға торғанында, ниндәйҙер бер самолет пассажирҙары аэровокзалға инә башлай ағылып, шулар араһында, туҡталып, портфелен иҙәнгә ҡуйған Рәмиҙе күреп ҡалып, тап көндәлектә әйтенлгәнсә: "Рәми!" — тип ҡысҡыра Надя. Рәми, тертләп, салт-әйләнеп ҡарай. Ҡабалан ғына бер-ике ауыҙ һүҙ һөйләшкәс, Надя сәфәрен дауам итергә — самолетҡа ултырырға мәжбүр була...

Надя Мәскәүҙән, ул заманға хас, егерме килограмм ит күтәреп ҡайтып төшә. Аэровокзалдан улы Азаматҡа шылтыратып, февраль һыуығында йоҡа ғына кейенгән улы уны килеп ала (таксиҙа ҡайтып китәләр). Лифт эшләмәй, итте саҡ мендерәләр һөйрәкләп. Ә Рәми өйҙә өҫтәле янында эшләп ултыра. (Иҫерек инеме, тип һораным, юҡ, айныҡ ине, тине). Надяның ошо ҡайтыу көнө нисәнсе числола булғанын һорамағанмын.


Рәми йыназаһында. Актерҙар йорто.

Ә үлеүен ошолайыраҡ һөйләне: эшләп ултырған еренән: "Уй-уй, эстән бөтәһе яна (жгет)", — тигәс, ашҡаҙанылыр, тип уйланым (сөнки һуңғы йылдарында — эсә, ләкин тамағына ашата алмай инем, бөтөнләй ашамай ине). Таблетка йотторотоп, диванға һуҙылып ятты, һыҙланып, ухылдай башланы. Ауырта, тип ныҡ ҡысҡырғас, телефон юҡ — йүгереп сығып, лифттағы мегафон аша йорттар идаралығы диспетчерынан медицина тиҙ ярҙамы саҡырыуын үтендем. Бер врач (урыҫ

кешеһе) килеп етеп, ауырыуҙы ҡараны, укол ҡаҙап тынысландырҙы. Борсолоп һорауыма: “Ҡурҡыныс юҡ, бер нәмә лә булмаҫ, — тип йыуатты. — Шулай ҙа больницаға илтергә кәрәк — ҡайһы больницаға?” — тигәс, 1-енсе больницаға (түрәләр больницаһына), тинем. “Юҡ, унда булмай, Туҡай урамындағы больницаға илтергә кәрәк”, — тигәс, ризалаштым. Шул саҡ Әнүр Вахитовтың өлкән улы Азамат, атайым һеҙҙе ҡунаҡҡа саҡыра, тип килеп еткәйне, күрәһең бит бында ниндәй хәлдәр, атайыңа әйт, үҙе килһен, тип ҡайтарып ебәрҙем, Әнүр тиҙҙән килеп етте (яҡын торалар). Рәмиҙе носилкаға һалып сығарҙылар, тиҙ ярҙам машинаһында үҙем һәм ҡыҙым Гөлнара оҙатып алып киттек. Машина юлдың сутырмағына тура килеп бик ҡаты һелкеткәс, врач йәһәт Рәмиҙең беләген услап пүлсен тикшерҙе... Ә больницала бер кемдең дә ауырыуҙа эше юҡ: коридорға һалып ҡуйып, ике регистратор ҡыҙ, һис тә иҫтәре китмәй, үҙ-ара ләстит һата-һата бик оҙаҡ яҙҙылар, түҙемлегем ҡалманы. Ә беҙҙе алып килгән врач (урыҫ кешеһе) ҡайҙалыр китте лә юғалды... Ауырыуҙы, ниһайәт, бүлмәгә индереп, бәләкәй генә буйлы бер мәрйә-врач хәстәрлек күрә башланы. Укол яһарға тип шприц алдыртһа ла, был ярамай, энәһе нәҙек, тип кире бороп ебәрҙе, йыуан энәлене килтергәнсе тағы байтаҡ ваҡыт әрәмгә китте. Ә теге төп кеше, алып килгән врач (урыҫ кешеһе), һаман юҡ та юҡ, киткән еренән һаман әйләнеп килмәй зарыҡтыра... Ошо шомло юғалып тороуы бик оҙаҡҡа һуҙылып, бына саҡ килеп етте. Ҡыҙыңды илтеп ҡуйырбыҙ, үҙең ҡалып тор хәҙергә, тинеләр (Гөлнара ҡайтып китте). Иҫен юйған Рәмиҙең күкрәген “качать” итергә тотондолар, ике ҡулы ҡапыл үргә ҡалҡынды. Икенсе тапҡыр ҡулдары бик һүлпән, түбән генә ҡалҡынғас, шом бөрҙө йөрәгемде...

Шулай ҙа иҫенә килде, миңә ҡайтып китергә кәңәш иттеләр. “Наденька, иртәгә папирос килтер”, — тине Рәми. “Һиңә тартырға ярамай бит”, — тигәйнем: “Мин аҙлап ҡына тартырмын”, — тип ҡалды. Иртәгәһенә барғанымда уға бер нәмә лә кәрәкмәй ине инде...

Шағирҙы больницаға алып килгән һәм уны ашығыс рәүештә ҡотҡарыу сараларын күрергә тейеш булған баяғы врачтың, енәйәтселәрсә һалҡынлыҡ күрһәтеп, оҙаҡ ваҡытҡа юғалып тороуы унымң Ахунйәнов, йәки КГБ кешеһе менән кәңәшләшеүенә бәйле түгелме икән? — Надя Ғарипова хәҙер шул фекерҙә.

Һәр хәлдә, Зәйнәб Биишева апайыбыҙ, күпме генә ауырыһа ла, больницаға ятыуҙан ҡырҡа баш тартыр: “Унда “Күҙрәш” яһилдары — беҙҙең кеүек башҡорттарҙың башына етәләр, Жәлил Кейекбаевты ла, Сәләх Кулибайҙы ла шулар үлтерҙе”, — тиер ине...

Ләкин сетерекле һорау килеп тыуа ошонда: шағирыбыҙ, унының тол ҡатыны әле һөйләгәнсә, Өфөнөң Ғ. Туҡай урамындағы 1-енсе һанлы дауаханала вафат булған икән, ниңә унының мәйетен, шул дауахана моргынан түгел, ә ҡаланың икенсе

осондағы Цветочная урамында урынлашҡан ҡала моргынан (криминал тойолғандай!) алып ҡайттыҡ (үҙем ҡатнаштым)?..

Мәҫәлән, Ғәйнан ағай Әмириҙең хәләл ефете Сара еңгәй Тихорецкая урамындағы дауаханала үлгәс, мәйетен шул дауахана моргынан алып сыҡтыҡ бит (үҙем ҡатнаштым)?!.

Байтаҡ йылдар үткәс, билдәле шағирабыҙ Кәтибә апай Кинйәбулатова миңә ошо хаҡта "ысынын" (уның һүҙе) һөйләне: Рәмиебеҙ үҙ фатирында үлгән һәм был көтмәгәнсә булған (нисек икәнен бында теркәп тормайым); Надежда Васильевна, шунда уҡ, үҙҙәренән бер ҡат аҫта йәшәгән, мәрхүмдең шешәләш табындашы слесарҙе ярҙамлашырға саҡырып индергән, 1-се башҡорт интернат-мәктәбендәге мәрхүмдең яраҡкан уҡытыусыһы Р. ханымды телефон аша саҡыртып алған; фажиғәнең шомло серен Кәтибә апайға шул ханым үҙе сискән... (Аяныслы был хәбәрҙе шәхсән мин үҙем, әлбиттә, раҫлай ҙа, кире ҡаға ла алмайым, ә шулай ҙа тумбытып китеүҙе Тарих ҡаршыһында бурысым һананым).

Мин Р. Зоргелағы фатирға барып кергәнемдә шағирҙың баяғы шешәләш тә, серҙәш тә яҡындары, шау-шоулы өйөр, ерләү кәрәк-яраҡтары артынан таралышҡайны; оло ҡустыһы Рауил да шул ауыр матәмле мәсьәләләрҙе хәл итмәккә киткәйне. Кесе ҡустыһы Урал менән икебеҙ үлек йортонан табутҡа һалынған мәйетте алып ҡайтып, йыйылып өлгөргән халыҡ менән күмәкләшеп залға керетеп һалдыҡ. Һуңғы йылдарҙа даими кейеп йөрөгән, терһәк һәм тубыҡ тәңгәлдәре ҡырылып туҙған һорғолт төҫтәге үтә таныш костюмынан, табандарының ярты яғы асфальтҡа ашалып бөткән һәм ҡыйыш баҫып йөрөмәле туфлиҙарынан, ниһәйәт, арынып, баяғы дуҫ-иш өйөрө үҙ-ара иғәнә һалышып һатып алып кейҙерткән энәнән-ептән ҡара костюм, ҡара-йылтыр ботинкаларынан ҡәнәғәт һымаҡ һуҙылып ятҡан мәрхүмдең йөҙө тыныс, күкрәгенә ҡаушарып һалынған уң ҡулының тәмәке һарғайтҡан өс бармағы, тап ҡәләм ҡыҫып тотҡандай, ҡуша ныҡ бөрөләп ҡатҡайны. Әсәһе Мәрйәм апай, әленән-әле шул ҡулын һөйөп тә үбеп: «И балаҡайым, һаман ҡәләмен тотоп, шиғыр яҙып ята бит!» — тип һулҡылдай... Мәрхүмдең васыят-шиғыры буйынса, ҡустыһы Урал уны тыуған Салауат районына — Ҡаратау башына алып ҡайтып ерләү теләген белдерһә лә, яҙыусылар етәксеһе Мирзаһитов иптәш: «Шағир баш ҡалала ҡалырға тейеш — ҡәҙерле булыр, ҡәберенә сәскә һалырҙар», — тип кире кәңәш күндергән (ә мәрхүм булғаһы үҙен, васыятына ярашлы, Туймазы яғына алып китеп күмделәр). Актерҙар йортондағы хушлашыу матәмендә ҡайғымдан язаланып, тәҙрә тупһаһында ҡарт шағир Мөхитдин ағай Тажи янында һыҙлаған йөрәгемде тотоп ултырыуымды ырыуҙашым журналист Азат Байсурин фотоға төшөрөп алған...

Ҡаратау булмаһа ла, урыны изге Ҡоба тауҙың “обсерватория” башняһы сүҡайтылған иң бейек өлөшөндә, әммә, шағир өсөн ике метр ер ҙә табып булмағандай, ҡәбер сите зыяраттың сик һыҙығына беркетеп ҡаҙылғайны. Түмәләскә һуңғы тупраҡтарҙы өйгәс, баяғы тынғыһыҙ өйөр (“шәкерттәре”), ығы-зығы килеп, фотоаппараттарҙың күҙҙәренә эләгеп ҡалыу өсөн, ҡәбер тирәһенә ябырылды, хатта баш ҡаҙығын ҡосаҡлап тороп фотоға төшөүсе лә булды (һуңынан шулар тарафынан мәрхүм шағирҙың үтә ғәзиз йән дуҫтары булыуҙары тураһында йөҙәрләгән иҫтәлектәр яҙылды).

Надежда Васильевна үҙенең баяғы иҫтәлекнамәһендә Мәскәү яҙыусыһы Эдвард Радзинскийҙың аҡыллы һүҙҙәрен килтерә: *«Писателю должны повезти не только с женой, а и с вдовой!»* — Тап Надяның үҙе тураһында әйтелгәндәй был! Ысынлап та, беҙҙең ҡатындарыбыҙҙың шундайҙарының тәүгеһе лә, һуңғыһы ла булыр ул, моғайын...

Мәрхүмдең гүр тупрағы һыуынып та бөтмәҫе элек, уның әҫәрҙәрен нәшер итеүҙе юллап, уға дәүләт бүләге һәм хөрмәтле исем биреүҙәрен һорап, хөкүмәт йорттарының ишектәрен ныҡышмалы шаҡырға, тупһаларын шымартырға кереште. Күп тә үтмәй, тәүге ҙур йыйынтығын сығартты һәм шағирҙың гүзәл ижадына бөтә йәмәғәтселекте йәлеп иттертте. Тере сағында Рәмиҙең шиғырына бер композиторыбыҙ моңло ғына көй яҙғайны («Йондоҙом», Рафиҡ Сәлмәнов музыкаһы) һәм шағир уны күңеле нескәргән минуттарында барлы-юҡлы тауышы менән мөңгөрләп ултыра торғайны, йыш ҡына шөңгөр тауышлы Надяһы ла ҡушылыр ине. Хәҙер иһә уның элек иғтибарһыҙ ҡалдырылған шиғырҙарына унарлаған композиторҙар көй яҙҙы, ул йырҙар сәхнәләрҙән, зәңгәр экрандарҙан һәм эфир тулҡындарынан халыҡ йөрәгенә үтеп керҙе (“Шағир ҡәҙерен кем белһен, үҙе үлеп белдертмәһә”. – Ғ. Туҡай). Шағирыбыҙға үлгәндән һуң Салауат Юлаев исемендәге дәүләт бүләге, Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән иң юғары исем бирелде. Был йәһәттән арымай-талмай шағир ижадын пропагандалаусы Надежда Васильевнаның һәм баяғы өйөр-өйөр шағир дуҫтарының тырышлыҡтары ҙур булды. Һәм Надежда Васильевна, үҙе төҙөп, мәрхүмдең өс томлыҡ әҫәрҙәрен донъяға сығарҙы, башҡорт мәҙәниәтендә был тәрән эҙ ҡалдырған баҫмаға әйләнде. Әммә шағир тормошоноң иң мөһим мәғлүмәттәренә эйә булған көндәлек дәфтәрҙәренең бер-нисәһенең филолог Ғайса Хөсәйенов ҡулында «һеңеп» ҡалыуы һәм томдарға инмәүе бик аяныс.

Ни өсөн, тиһегеҙме?

Мәҫәлән, шағирҙың бер туған ҡустыһы Рауил иҫтәлегенән өҙөк:

*«Бер ваҡыт каникулға ҡайтып төштө Рәми. Ул саҡта беҙҙең ғаилә ферма көтөүен көтә ине. Шулай Йөрүҙән буйында көтөү көтөп йөрөгәндә, беҙгә ярҙамға Рәми*

*агай килде. Үҙенең ҡуйын дәфтәрҙәрен дә алған (ҡуйын дәфтәре уның һәр ваҡыт үҙе менән булды).*

*Шул көндә яҙған шиғырҙарын уҡыны. Мин, һоҡланып, маҡтау һүҙе әйткәнмендер инде. Шул саҡ ул, туҡтап, миңә ҡарап торҙо ла: «Бына олораҡ ағайың минең был һүҙ теҙмәһе тураһында нимә яҙа», — тип, бер таныш булмаған почерк менән яҙылған юлдарҙы уҡып бирҙе. Белмәйем,* ***ул дәфтәр юғалғанмылыр, архивында күренмәй.*** *Был Ғайса Хөсәйенов ағайҙың Рәми шиғырҙарына ҡарата әйтелгән беренсе һүҙҙәреса Хөсәйенов ағайҙың Рәми шиғырҙарына ҡарата әйтелгән беренсе ендер инде. Шул саҡ ул, туҡтап, миңә ҡарап торҙо ла: «Бына олораҡ ағайың минең был һүҙ теҙмәһе тураһында нимә яҙа», — тип, бер таныш булмаған почерк менән яҙылған юлда,* ***бөтөнләй яҙмағаның артығыраҡ, шиғыр яҙып маташма»,*** *— тигәйне ул».* («Шоңҡар» журналы, 2002/1).

Ниңә көндәлектәрҙә был һ.б. күренмәй — баяғы Ғайса ҡулында «һеңгән» дәфтәрҙәргә ишара түгелме?

Хәйер, мәсьәләне асыҡлаусы документ — алдыбыҙҙа. Урыҫ әйтмешләй, что написано пером – не отрубишь топором:

***Директору ИИЯЛ БНЦ УрО АН СССР доктору филологических наук, профессору Ураксину З.Г.***
***Секретарю партбюро института товарищу Надыргулову У.Ф.***
***Копия: Председателю Комиссии по милосердию при Союзе писателей БАССР товарищу Карамышевой Т.Ф.***
***от вдовы поэта Рамия Гарипова — Гариповой Н.В.***

*ЗАЯВЛЕНИЕ*

*Летом 1984 года пришел к нам домой Гайса Батыргареевич Хусаинов, председатель комиссии по архивному наследию Гарипова Рамия и изъявил желание познакомиться с его дневниками.*

*Пересчитать и записать сколько он берет тетрадей, он не предложил, а я постеснялась оскорбить его своим недоверием. Вот так я отдала ему все дневники моего мужа.*

*В 1985 году в журнале «Агидель» (№3) вышла его статья «Шагир шәхесе (Рәми Ғариповтың көндәлектәре буйынса)», в которой были использованы выдержки из дневников Гарипова, за что ему были благодарны читатели, поклонники поэзии поэта. Но вот уже 6 лет уважаемый Гайса Хусаинов заставляет меня умолять вернуть оставшиеся у него дневники. Дело в том, что он вернул семье поэта всего 11 тетрадей, а остальные оставил у себя и отказывается вообще вернуть, мотивировать свой поступок тоже отказывается. Сначала говорил, что у него пока времени нет, затем*

*предложил мне самой искать у него дома (?!)... Я просмотрела всю статью Гайсы Хусаинова, выписала все цитаты, включенные в нее, сверяла с дневниками, которые он вернул. (В этих дневниках имеется нумерация, сделанная рукой Хусаинова). Всю проделанную работу показала Хусаинову и объявила о своем намерении выступить по этому поводу на X съезде писателей БАССР, который к этому времени приблизился. И только тогда он забеспокоился. На второй день съезда с утра принес один блокнот (а не тетради Рами) и пообещал клятвенно, что вернет все остальные тетради-дневники. 6 и 8 ноября 1988 г. он посвятил тому, что сидел у нас дома и выверял статью с дневниками, вынужден был согласиться со мной и сам же указал за какие именно годы тетради остались у него. Казалось бы все уладилось, но опять начались мои хождения. 24 января 1989 г. после моих требований вернул еще одну тетрадь, а остальные опять отказывается вернуть, заявив, что у него их нет.*

*Убедительно прошу Вас повлиять на Г. Хусаинова, т.к. дневники Рамия Гарипова — это не только семейная реликвия, а является достоянием всей башкирской литературы. Обкрадывать Р. Гарипова — это значит обокрасть башкирский народ.* ***Н. Гарипова.*** *20 февраля 1989 г.*

Ул дәфтәрҙәрҙең ҡайтарылып бирелмәүен шағир томдарындағы уларҙан ҡалған бушлыҡтар ҙа дөрөҫләй...

***

## Рәмиҙе юҡһыныу

Тыуҡһан етенсе йыл, алтынсының
Һуңғы төнөн һүреп, яҡынлай.
Ҡыш бабайҙы түгел — һине көтәм,
Инерһең, тип, ишек шаҡымай.

Урыҫ танау, мужик маңлайыңды
Бөҙрә сәсең көләс килтерер.
Ярты табан ҡыйыш түфлиҙәрең
Ишек төпкәйендә сиселер.

“Ни хәл, Йыһат ҡарт?!” — тип өндәшеүең
(Ул саҡ әле йәп-йәш булһаҡ та!)
Һәм көлөүең тамаҡ ҡырып ҡына —
Тора зыңлап һаман ҡолаҡта.

“Сәй ҡуяйым”, — тиер хужабикә,
Илем итәғәте бойороп.
“Сәй эскән бар ҙа ул, Сания...” — тип,
Саҡ ҡына көрһөнөп ҡуйырһың...

Етешмәгән донъя хөкөмөлөр —
Булмай ҡуя “мәй”е шул саҡта.
Ҡайғырмайбыҙ ләкин, һөйләр һүҙҙәр
Былай ҙа бит дөрләй усаҡта!

Донъя яратылған замандарҙан
Хәҙергегә тиклем араны
Ала ине иңләп беҙҙең күңел,
Ҡора ине йәндәр байрамын!

Үҙең кеүек тағы ҡорҙашыбыҙ
Ҡорҙашлана ине эс керһеҙ —
Сафа улы Сафин ул саф йөрәк,
Башҡа Сафичтарға биргеһеҙ!

Терәй кеүек инек беҙ асманды,
Өс тағандай ҡуша берегеп.
Күктең таяуҙары итеп беҙҙе
Тоя кеүек ине Ер үҙе...

Шуғалыр шул, ауыр заманала
Ауырһынмай ғына йәшәнек.
Алға табан сәнскәкле юлды
Йәшлегебеҙ менән түшәнек.

Кителдең тик ҡорҙан йәш көйөңсә,
Бөтмәйенсә йотоп “мәй”еңде.
Ҡышын — һине, көҙөн әсәйемде
Оҙатыуым алды йәнемде...

Төп-терәге күктең емерелеп,
Көмбәҙ гере баҫты иңемә.

Дүрт аяҡлап инде торам терәп,
Текә баҫып торор көйөмә...

Ҡуймайһың иң, килеп йәнәшәмә,
Инде миңә ни хәл итергә?
Яҡшы беләм: ахыры тура килер
Йәнәшәңә үҙем китергә.

01.01.1997.

## Рәмигә

Бирер инең миңә һин ҡаныңды,
Мин — бирергә әҙер йәнемдә.
Шулай инек... Быуаттарҙы аша
Ҡарап һөйләштек беҙ, кәмендә.

Ҡубарылып болот баш өҫтөндә,
Көндәребеҙ көлмәй башланы...
Төшөрҙөң көс шул саҡ һин бокалға,
Ә мин уны ташҡа ташланым...

"Ташла!" — тинем. Ләкин ташламаның,
Тик нығыраҡ уға тоташтың.
Маңлай бәреп кенә таш ватмағас,
Баш ватылһын, тиеп һаташтың.

Әллә ниңә күңел олпатлығын
Һуңғы сиктәргәсә тотманың.
Арыҫланды һырған себендәрҙәй
Һырғайны шул көнлөк дуҫтарың...

Һуңғы тапҡыр ҡорған табыныңда
Ултырғандар, өҫтәп ҡаныңа.
Улар тайған.
Ыулы бокал услап
Ғазраилың килгән янына...

“Ҡаратауға мине ерләгеҙ”, — тип,
Васыятың ҡалған уларға.
Өфө убаһынан уҙалмағас,
Ҡалды инде беҙгә иларға...

9.07.1980.

# РАФАЭЛЬГӘ 85.

## Таңды һыҙылдырған моң

Шағирҙарыбыҙ араһынан кристаллдай саф намыҫлы ике шәхесте беләм, береһе – өлкәнерәк быуын Муса Ғәли, икенсеһе ҡорҙашым Рафаэль Сафин. Шул уҡ ваҡытта ул, Рафаэль ҡорҙашым, түгелергә тулышып торған моңло-моңһоу талант эйәһе ине...

...Көндәгесә Өфөлә, ярты кәүҙәм һыймалы тар-һаран диванда ятам. Тоям, тоям, -- төн шәүләһе һүрелгән, йоҡомһораған күктә Сулпан йондоҙ балҡыған, көнсығыштың көмбәҙ сите күгәргән... Һыҙылып-һыҙылып сыға моң – таңды моң һыҙылдыра. Күҙҙәремде әле аса алмайым, сөнки моңло алйыулығым ебәрмәй...

Коммунистик урамдағы ап-аҡ йорт, икенсе ҡат, моңло фатир. Өс ҡорҙаш (өсөбөҙ ҙә 1932 йылғылар), өс моңдаш, -- Рафаэль Сафин, Рәми Ғарипов һәм мин, моңло табын ҡорғанбыҙ. Рафаэль дуҫыбыҙ йырлай. Халҡыбыҙҙың ҡанлы-йәшле һыҡтауын. Мәшһүр йырҙың бигерәк тә баҫмаларға халыҡсан килеш кермәгән беренсе өлгөһөнөң аҙаҡҡы куплеты...

«Ҡолой кантон»дың китап өсөн шымартылған был өлгөһө (хәҙерге йыраусыларыбыҙ гелән шуныһын башҡара) һәм ябай халыҡ араһында бәйһеҙ гиҙгән шыраулыһы (унынын малай сағымда уҡ ҡарт ҡурайсы Муллахмәт олатай Ҡотлобаевтан һәм яңы осорҙа шанлы йәш йырсы Райман Ишбаевтан ишеттем)... Өстағанланып бергә кисергән ул төндәрҙә Рафаэль дуҫыбыҙ ҡайһыныһын һайлағандыр, әммә минең ҡолаҡҡа ул, таң һыҙылып килгән тап ошо хәҙерге мәлдәремдә, ҡып-ҡытыршы өлгөһөндә салына:

Кантон да ғына кантон килә, тиҙәр,
Килгән кантондарҙан ҡаҡшаныҡ.
Яуыз кантондарҙы ҡуя икән
Рәсәй тигән яуыз батшалыҡ...

Рәми менән икебеҙҙең алҡымдарға ҡанлы төйөр тығыла, өндәшмәй, эрүмкәнән берҙе генә йотабыҙ. Рафаэль дуҫыбыҙ ҙа, уфтап, ҡушыла...

Шунан һуң кәштәнән М.Ю. Лермонтов томын ала (килгәнебеҙ һайын, беҙ уның сихриәтле уҡыуында сихриәтле Лермонтовты тыңлай инек):

На воздушном океане,
Без руля и без ветрил,
Тихо плавают в тумане
Хоры стройные светил.

Средь полей необозримых

В небе ходят без следа
Облаков неуловимых
Волокнистые стада.

Час разлуки, час свиданья –
Им ни радость, ни печаль;
Им в грядущем нет желанья
И прошедшего не жаль...

Үткәндәрҙән һыҙылған моң күңелемдә ағыла ла ағыла, таң тигәнең һыҙыла ла һыҙыла, йомоҡ килеш күҙҙәремдән йәш тиртә, шуның татлы асыһынан асылып, асы бөгөнгөмә ҡайтам, таң шаңдағы күк көмбәҙен алһыулаған яҡты донъяға бағам: таң атҡан, Ҡояш ҡалҡҡан, календарҙа 2017 йылдың 16 феврале – МОҢЛО ШАҒИР Рафаэль Сафин тыуған көн! 85 йәше тулды!

## Ҡорҙаш менән хатлашыу

(“Эскерһеҙҙең тормошо” тигән китабымдан өҙөк)

Иҫәнмеһең, Рафаэль ҡорҙаш!

Һағыныслы сәләмдәр ебәреп, Йыһат.

Өфөнән ҡайтып киткәндән биреле (йәғни Яңы йылдан һуң) мин һиңә, бына, дүртенсе тапҡыр шиғырҙар ебәрәм инде. Ләкин һинән бер ҙә яуап ала алғаным юҡ, ҡорҙаш. Хаттарҙы заказлап һалғайным — барып етергә тейештәр инде, үҙемсә. Ниңә яуап яҙмайһың, әллә ваҡытың юҡмы? Нәмәләрем тураһында редакция фекерен белгем килә. Бер хәбәр ҙә булмағас, бушҡа эшләп ятмайыммы икән, тигән уй киҫә күңелде.



Й. Солтанов, Р. Сафин "Ағиҙел”дә.

Повесемде лә аҡрынлап эшләйем. Ваҡыт етеңкерәмәй. Башҡорт дәүләт университетына йәйге йыйылышҡа барыуыма эшләп өлгөртә алһам, яҡшы булыр ине, тим.

«Йәш көстәр»гә шиғырҙарым индеме, «Ағиҙел»дең 3-өнсө һанында әлеге нәмәләр баҫыламы? Мин ул һанды, күҙем ҡарайып, көтөп торған булам инде. Ләкин: «Баҫылмағандыр, берәй сәбәп сыҡҡандыр», — тигән шикле уй борсой. Сөнки минең өлөшкә ундай «сәбәп»тәр бик йыш тейеп тора ул. Яҙмыш шулайыраҡ...

Үҙең ни хәлдә, ҡорҙаш? Яҡшы ғына ял итеп ҡайттыңмы? Нимәләр

өҫтөндә эшләйһең? Ижад пландарың ниндәй?

Мин колхозда эшләйем, грузчик һ.б. булып. Ҡыш буйы һалам ташыныҡ. Яҙғы сәсеүҙә орлоҡ ташыясаҡмын (машинала, тейәүсе булып). Шулай хәлдәр. Ситтән тороп уҡығас, ваҡыт бик аҙ.

Эшеңдә уңыштарға ирешеүеңде теләп, **Йыһат**. 13.04.1964.

Рафаэль ҡорҙаш!

Ике шиғыр ебәрәм, ваҡыт тапһағыҙ, ҡарап сығығыҙ әле.

Мин былтыр йәш яҙыусылар өсөн үткәрелгән семинарҙан һуң Өфөнән ҡайтҡас, әлеге һөйләшеп ҡуйыу буйынса, үҙемсә яҡшы тип һаналған 24 шиғырымды ебәргәйнем. Ни өсөндөр һеҙҙән яуап булманы. Алдығыҙмы уларҙы? Унан алда ебәрелгән шиғырҙарҙы ла баҫтырманығыҙ (хәтерегеҙҙәме, һеҙ улар эсенән дүртәүен «С.Б.» газетаһына бирергә булғайнығыҙ?).

Мөмкин булһа, зинһар, шиғырҙарымдың яҙмышын хәл итегеҙ әле. Үтенәм. **Йыһат Солтанов**. 16.04.1963.

Һәм бына һис көтмәгәндә Өфөнән шаңҡытҡыс сәләм:

Йыһат ҡорҙаш!

Иң тәүҙә һинең алдыңда ғәфү үтенәм. Шиғырҙарыңды оҙаҡ ятҡырып ташлағанмын. Ҡул теймәне, буғай. Уларҙы бит бик кәйеф барҙа ғына бик ҙур иғтибар менән уҡырға кәрәк ине. Бына бөгөн, ниһәйәт, уҡып сыҡтым. Һәм минең нисек шатланғанымды күҙ алдыңа килтерә алырһыңмы, юҡмы! Теге ваҡытта мин һиңә һаҡһыҙыраҡ: «Һин, шағир булыуҙан бигерәк, прозаик», — тигән фекерҙе әйтә биреп ҡуйғайным шикелле. Яңылышҡанмын. Һин — шағир ҙа, Йыһат. Бына тигән шиғырҙарыңды уҡыным әле. Һин шиғри бальзамды, беҙҙең шикелле, крандан ағыҙып түгел, ә шишмәнең үҙенән ҡуш услап алып эсәһең. Һинең донъяға ижади ҡарашың бар. Һинең шиғырҙарҙа, бөтәһенән элек, тормош тәжрибәһенән килгән фекерҙәр ярылып ята. Шуларҙы һин, ҡытыршыраҡ формала булһа ла, үҙеңсә әйтеп бирә беләһең. Әлбиттә, яҙыу алымың ысынлап та бер аҙ ҡытыршыраҡ. Ләкин шөкәтһеҙ түгел. Ошо ҡытыршылыҡтың үҙенең яҡшы яғы ла, насар яғы ла бар. Яҡшы яғы шунда: шиғырҙарың бик тәбиғи ағалар. Ышандыралар. Ә был — ҙур нәмә. Насар яғы инде шунда: уларҙың ритмдары күп осраҡта тигеҙһеҙ булыуы ҡолаҡты яра биреп ҡуя. Һикәлтәле юлға оҡшап китәләр. Мин хәҙергә һинең шул етешһеҙлегеңә генә иғтибар итеүеңде һорайым. Сөнки был бик мөһим етешһеҙлек. Һөйләү манераңдың ҡырыҫыраҡ булыуын етешһеҙлек тип иҫәпләмәйем. Ул — хатта яҡшы ла. Ә бына шиғыр техникаһының ҡайһы бер закондарына буйһонорға кәрәк тип уйлайым.

Бер строфаны ғына тикшереп ҡарайыҡ.

Көрәш ятты һәр саҡ алдымда,
Хисләнергә ваҡыт булманы.
Һәм мөхәббәт миңә алыҫтан
Ғына тартынып ҡул болғаны.

Тәүге ике юлы шыма. Дүртенсе юлы инде абындыра. Беренсенән, «ғына» киҫәксәһен «алыҫтан» һүҙенән айырып, икенсе юлға күсереп яҙыу шиғырҙы бик боҙа. Икенсенән, дүртенсе юлдағы һүҙҙәрҙең килеше бөтөнләй урынлы түгел. Сағыштырыу өсөн ошо уҡ юлды үҙгәртеп әйтеп ҡарайыҡ:

Һәм тартынып ҡына алыҫтан
Ҡул болғаны миңә мөхәббәт.

Ритм бөтөнләй икенсе бит. Һин быны белмәйһең түгел, беләһең. Ә бары тик шиғырҙы шымартып ултырырға ғәҙәтләнмәгәнһең генә. Ә бит ул кәрәк. Һынлы сәнғәт оҫталары бит бер ниндәй формаһыҙ таштан да ниндәй гүзәл һын барлыҡҡа килтерәләр. Материалың бит һинең бай. Әйҙә, ҡорҙаш, ошо булған материалды эшкәртергә иренмәйек. Үҙ эшебеҙҙең оҫтаһы булырға ирешергә тырышайыҡ.

Бына шул минең һиңә ҡарата төп кәңәшем. Кәңәш кенә түгел, үтенесем дә. Сөнки, һиҙәм, һиндә һәр кем дә эшләй алмай торған нәмәләрҙе эшләргә мөмкинлек бар. Бер мәлде мин йәшлек тәүәккәллеге менән шундай юлдарҙы ла яҙып ташлағайным:

Минең ҡулдан килер шундай эштәр:
Эшләй алмаҫ уны һәр кем дә.

Был, әлбиттә, бик тыйнаҡ әйтелмәгән. Ләкин үҙ-үҙеңә ҡарата шундай ышаныс һәм ныҡышмалылыҡ менән эшләү насар түгелдер.

Шулай итеп, әйҙә, Йыһат ҡорҙаш, шиғыр өҫтөндә скульпторҙар ныҡышмалылығы менән эшләйек. Фекере, образдары булһа, ҡалған яғы былай ҙа үтә ул, тип ҡарамайыҡ.

Редакциялағы был шиғырҙарыңды һайлап, бер аҙын йәштәр һанына индерергә тырышырбыҙ. Ул турала һөйләшеп тә ҡуйҙыҡ. Ә ҡалған яғын уйла әле.

Унан һуң журналдың үҙенә генә ҡағылышлы бер һүҙем бар. Һин бит инде хәҙер беҙҙең ғаилә ағзаһы булып киттең. Хәҙер киләһе йылға ҡарата журналға яҙылыу бара. Уны үҙегеҙҙең тирәлә (үҙегеҙҙең ауылда булһа ла) таратыуҙа һин дә булышһаң ине. Бына шул.

Сәләм менән, эшеңдә уңыштар теләп, журналдың поэзия бүлеге мөдире **Рафаэль Сафин**. 8.10.1963.

«Яҡшы һүҙ — йән аҙығы», — тигән мәҡәлдең ҡөҙрәтен тойҙом шунда; табандарым әрһеҙ ерҙән ҡубынып, ҡулдарым ҡанатҡа әүерелеп, осоп барғандай инем. Йөрәгемде усыма һалып, тигәндәй, яҙҙым хатты:

Рафаэль ҡорҙаш!

Бөгөн һинең 8.10.1963. яҙған хатыңды алып, уҡыным һәм, шатлығымдан, ни эшләргә лә белмәнем. Көтмәгәндә булды был хәл!

Мин һиңә шиғырҙарымды бик ҡыймай ғына ебәргәйнем һәм уларға быңдай йылы ҡараш күрһәтелер тип өмөт тә итмәй инем. Шулай ҙа шиғырҙарымдың гелән кәбәктән генә тормауына күңелем ышана ине минең; йөрәгем, бошоноп, унда тос йәҙрә орлоҡтарҙың да төрөнөп ятыуын, ләкин уларҙы ни өсөндөр бүтәндәр күҙгә элмәүен, иҫәпкә алырға теләмәүен һиҙенеп һыҙлай ине...

Ошо көнгә тиклем мин үҙемде, шиғыр яҙыу минең ҡулдан килмәй, мин — шағир булырлыҡ кеше түгелмен, тип ышандырырға тырыштым һәм эстән генә, һиҙҙертмәй, көйөнөп йөрөнөм. Бына ни өсөн шулай булды был.

Бер заман мин 40-50-ләп шиғырымды (уларҙың байтағы быйыл мин һиңә ебәргән шиғырҙар араһына ингән) Өфөгә ебәреп ҡарағайным. Бер ни тиклем көткәс, яуап хаты килде. Хикәйәләре менән бөтә халыҡҡа танылған прозаик иптәш тарафынан яҙылғайны был рецензия. Был ағай, шиғырҙарымдағы рифма, ритм сатаҡлыҡтарын бик дөрөҫ күрһәтеү менән бер рәттән (мин быны үҙем дә белә инем һәм ҡайһы бер өлкән быуын шағирҙары ижадында ла шундай уҡ күренештәрҙе осратҡанлыҡтан, был шулай китә бирә икән, тип уйлай торғайным), ундағы шиғыр юлдарына ишелеп ятҡан моңдо ул рух төшөнкөлөгө, пессимизм тип атаны, һәм ижади киләсәгемә кресть тартып ҡуйҙы. Һуңғыһы менән мин риза булманым. Моң эсенә төрөнөп ятҡан ялҡынды күрергә теләмәүҙәре рәнйетте мине...

Шул йылды миңә Өфөгә барырға, редакцияға инергә тура килде. Был юлы мин үҙемдең шиғыр яҙыу тәжрибәмә ҡарата, рәсми рәүештә, тағы ла үлтергесерәк баһа, һөҙөмтә ишеттем. Редакцияның яуаплы секретаре М. Тажи ағай миңә, туранан-тура: «Беҙ һиңә күптән әйткәйнек бит инде, шиғыр яҙма, ә проза менән генә шөғөлләй, тип. Һинән шағир сыҡмай!» — тине. Ошо ваҡиғанан һуң мин шиғыр яҙыуҙы бөтөнләй ташларға ҡарар иттем. Шиғыр китаптарын уҡымаҫҡа, шиғырға ҡарата үҙемдә нәфрәт тойғоһо тәрбиәләргә тырыштым. Йылдан артыҡ шулай яҙмай йөрөнөм. Ләкин был килеш йәшәү мөмкин түгел ине. Мин үҙем өсөн генә яҙа башланым. Уларҙы камиллаштырып, шымартып ултырыуҙы кәрәкмәгән эш тип һананым. Ниңә юҡ өсөн ваҡыт уҙғарырға, улар барыбер донъя күрмәйәсәктәр бит! Йөрәгемдә ҡайнаған тойғоларҙы һурып алып, мине бер аҙ бушатһалар — булды!

Ләкин тора-бара, мине тағы өмөт саткылары биләй башланы. Шиғырҙарымды тағы ла бер тапкыр ебәреп ҡарау теләге уянды. Һәм бына, көтмәгәндә, һеҙҙән шундай дәртләндергес хат алдым!

Мин, әлбиттә, ниндәйҙер гений булғанмын да, мине баһаламағандар, тигән фекер үткәрергә теләмәйем, о юҡ, ҡорҙаш! Әгәр шулай аңлаһаң, бик ҙур яңылышлыҡ булыр ине. Мин бында һис тә үҙем хаҡында түгел, ә поэзияның бер беҙҙәге булған моң хаҡында һүҙ алып барғым килә. Сөнки минең йөрәгем моңға бәйләнгән, шиғырҙарым, яҙған саҡта, моңға уралып сыға (һәр хәлдә, үҙемә шулай тойола). Һәм шул моң арҡаһында улар «рух төшөнкөлөгө», «пессимизм» тип аталдылар ҙа инде.

Әлбиттә, беҙҙең хәҙерге тормош өсөн төшөнкөлөк хас түгел; беҙгә дәртле йырҙар, шиғар-лозунгылары шартлап торған утлы шиғырҙар кәрәк. Ләкин был

ғына моңдо шиғыр донъяһынан һыҙып ташларға нигеҙ бирмәй әле. Сөнки моң — кеше күңеленә хас тәбиғи тойғо ул. Дәртһеҙ кеше булмаған кеүек, моңһоҙ йән дә булмай. Моң кисереү (быны аһ-зар менән бутарға ярамай) — кеше күңеленең иң нескә, иң гөманлыҡлы тойғоларының береһе ул. Йөрәген моң тирбәтмәгән әҙәм илгә, кешеләргә булған һөйөүҙең, яҙғы бөрө еле булып йөрәк аша күкрәп үтеүсе саф мөхәббәттең барлығын белә алмай. Моңдо халыҡ тыуҙырған һәм уны хисапһыҙ күп нескә һыҙаттар менән байытҡан. Әгәр беҙҙә революция еңгән икән, социализм төҙөлөп бөтөп, бөйөк коммунизм осорона китеп барабыҙ икән — моңдоң да көнө бөткән, дәрт кенә тороп ҡалған, тигән һүҙ түгелдер. Былай уйлаусыларҙы мин, етәкләп, халыҡ күңеле дәрьяһына килтерер инем һәм: «Ана, ҡарағыҙ, унда сайпылған тулҡындарҙың тауышына ҡолаҡ һалығыҙ!» — тир инем. Улар унда шатлыҡтарҙың да, дәртлектәрҙең дә, моңдарҙың да, халҡымдың меңмең төрлө бүтән яҡты тойғолары менән ҡуша аралашып, иҫәпһеҙ күп тулҡын булып тәгәрләгәнен күрерҙәр ине...

Халҡым миңә иң ҙур судъя ла, уҡытыусы ла. Халыҡ күңелен тыңлай белгән кеше ундағы иң нескә хистәрҙе лә тотоп ала. Мин шуны аңланым: халҡым моңдарҙы дәрт менән бергә, бер хоҡуҡта ҡулланып йөрөтә. Космик ракеталар осоронда ла кешегә моң кәрәк икән. Иғтибар итегеҙ: хәҙерге көндә лә кешеләр боронғо моңло оҙон көйҙәрҙе яратып тыңлай бит. Мәжлестәрҙә ултырғанда берәү оҙон көйҙө һыҙҙырып ебәрһә, бөтөн табын шым ҡалып уны тыңлай һәм, аҙаҡтан, иҫәпһеҙ күп алҡыштар менән тәбрикләй. Өфө радиоһы тапшырған моңло йырҙарҙы, башҡорттар ғына түгел, татарҙар ҙа һөйөп һәм йотлоғоп ҡабул итәләр. Күрәһегеҙ, йырҙарҙы тыуҙырған социаль ерлек емерелгән, ләкин йырҙар яңы ерлектә лә шанлы ғүмерҙәрен дауам итәләр. Сөнки халыҡ күңелендә уларҙың зыңғырлап һуғылыу ҡылы өҙөлмәгән...

Моң — күп ҡырлы кеше тойғоһоноң бер гүзәл һыры ул. Әгәр беҙ уны поэзия ерлегенән һыҙып ташлаһаҡ, уҡыусыны иң гүзәл тойғоларҙың береһен кисереүҙән мәхрүм иткән һәм шиғырҙы ярлыландырған булыр инек. Халыҡ, әлбиттә, шағирҙар моңдо танымай икән, тип, үҙенең моңға булған ҡарашын үҙгәртмәç инде. Шатлыҡ, дәрт тойғолары менән бер рәттән, ул һаман моң эҙләүен, моң кисереүен дә дауам итер. Шағирҙарҙың китабында тапмаһа, ул уны үҙе сығарыр. Ләкин ул уны ҡайһы ваҡыт дөрөç, ә ҡайһы ваҡыт яңылыш идея менән һуғарыр. Әҙәбиәт арҡылы халыҡ аңына тәьçир итә торған мөһим рычагтарҙың береһе беҙҙең ҡулдан ысҡынған булыр... Бына шуларҙы иғтибарға алып, ошондай фекер әйтке килә: әгәр ул яҡшы идея күтәреп, шул идеяны халыҡ күңеленә нескәлеклерәк юл менән алып барып еткереү өсөн килһә, моңға ҡаршы күçәк күтәрмәйек әле беҙ! Моң йәшәргә тейеш, ләкин ул, шағирҙар ҡәләме аçтында, уҡыусыға һағыш-хәсрәт, аһ-зар килтереү өсөн түгел, ә уның законлы кешелек тойғоһон ҡәнәғәтләндереп, шул уҡ ваҡытта уны киләсәккә ышаныс, Ватанға, халыҡҡа, партияға оло мөхәббәт, эшләнеп ятҡан бөйөк эштәрҙең ҡәҙерен белеү тойғоһо менән байытырға тейеш. Әгәр ошо күрһәтелгән вазифаларҙы уңышлы йөкмәп килә алһа, шағир йөрәгенән һарҡылып шиғырға төшкән уйсан моң һис тә «пессимизм емеше» тип аталырға тейеш түгелдер, минеңсә.

Ошо юлдарҙы уҡығас, был мырҙа моңло шиғырҙар ғына ижад итеп йәшәргә йыйына икән, тип уйлай күрмә тағы. Һис тә улай түгел. Кеше өсөн хас тойғоларҙың бөтәһе лә етерлек миндә. Әгәр шул күп төрлө тойғоларҙың тик береһен генә бөтә шиғырҙарыма һалып ҡуллана торған булһам, мин бик ярлы һәм бәхетһеҙ булыр инем. Шағир ижадында хистәр, тойғолар бриллианты бөтә ҡырҙары менән балҡып тоҡанырға тейеш.

Кескәй тәжрибәмдәге төп һыҙаттарҙың һинең тарафтан ыңғай баһаланышы, ысынлап та, ҡанатландырҙы мине, ҡорҙаш! Һин шиғырҙарымдың тышҡы ҡабығы үтәләй ысын үҙәкте күрә алғанһың. Шиғыр техникаһы яғынан ебәргән етешһеҙлектәрем тураһындағы һүҙҙәреңде тулыһынса ҡабул итәм һәм дөрөҫ тип иҫәпләйем. Һинең хатты уҡыу һөҙөмтәһендә шиғырҙарыма ҡабат күҙ йөрөтөп сыҡҡас, бына ошондай нәтижәгә килдем. Ысынлап та мин, һин әйтмешләй: «Фекере, образы булһа, ҡалған яғы былай ҙа үтә ул», — тиеберәк уйлағанмын икән шул. Ә инде: «Шиғырҙарҙы скульпторҙар нығышмалылығы менән эшләйек», — тигән саҡырыуың һәм бер ниндәй формаһыҙ таштан да гүзәл һын барлыҡҡа килтереүсе скульпторҙар ижады тураһындағы образлы миҫалың мине үҙ ҡәләмемә бөтөнләй икенсе күҙлек аша ҡарарға рухландырҙы. Эйе, ҡорҙаш, эйе, тормош тәжрибәләрен һәм халҡым күңелендә ятҡан гәүһәр тойғоларҙы, бихисап рухи байлыҡтарҙы камил формаға ла һала белергә кәрәк! Ә инде яҙыу манерамдың бер аҙ ҡытыршыраҡ булыуын йәғни шиғыр юлдарының һөйрәлеберәк килеүен йөкмәтке тарафынан талап ителгән сара, тип аңлатҡым килә, шулай ҙа. Ағастары япраҡҡа төрөнөп ултырған елһеҙ йәй айында ҙур йылғаларҙың талығып ҡына ағышын күргәнең барҙыр бит һинең? Мәҫәлән, Һаҡмар һыуының. Шаулап-ажғырып аҡҡан һай кисеүҙе үтеп, түбәнерәк барһаң, сикһеҙ тәрән уйға һәм моңға сумып, бер нисә саҡырым буйына талығып, тыныс һәм яй ғына ағып ятҡан тәрән йәшел ятыуҙы күрәһең. Ул уйлы, моңло булғаны өсөн шулай талығып яй ғына аға, һөйрәлеп аға кеүек...

Тағы ла өҫтәп, шуны әйтке килә: халҡы араһында, ҡарурмандағы ағастарҙай, тығыҙ һөйкәлеп йәшәгән кеше — төрлө төҫтәге буяуҙар араһына ташланған киптергес ҡағыҙҙы — промокашканы хәтерләтә. Промокашка бит яҙыу ҡараларының ҡараһын да, ҡыҙылын да, зәңгәрен дә, һайлап тормаҫтан, бөтәһен бер дәрәжәлә һеңдермәйенсә булдыра алмаған кеүек, әҙәм балаһы ла халыҡ тойғоларының төрлө биҙәктәрен: дәртен дә, моңон да һәм бүтәндәрен дә, айырмайынса, үҙенә ҡабул ҡыла. Ул биҙәктәрҙең иң яҡшыларын шиғыр аша халыҡҡа кире ҡайтарғанда, уларҙың бер генә тимгелен дә һүрелтмәй, юғалтмай, киреһенсә, шағир күңелендә яралған яңы тимгелдәр һәм идеялар менән тулыландырып, байытып бирергә кәрәк.

Ҡәҙерле ҡорҙаш! Быға саҡлым мин үҙемде ҡанаты һындырылған ҡош итеп һиҙә инем. Ләкин һинең ысын дуҫлыҡ хисе менән, минең көсөмә ышаныс белдереп яҙған илһамландырғыс һүҙҙәрең миңә яңынан ҡанат ҡуйҙы. Түбәм өҫтөндә тәрән бейеклек күрҙем һәм шул бейеклекте яулау мөмкинлеге барлыҡҡа ышандым. Иң мөһиме ошо!

Ҡанатҡа эйә йән — осорға, күккә күтәрелергә тейеш. Ләкин шағир поэзия күгенә үҙен бөтә донъяға күрһәтеү өсөн түгел, ә бөтә донъяға күктән һүнмәҫ ут йолоп алып биреү өсөн күтәрелә.

Мин шулай аңлайым.

Бына һеҙгә тағы ла бер нисә шиғырымды ебәрәм. Үҙегеҙ нисек ҡарарһығыҙ...

Иҫән бул, ҡорҙаш, ижадыңда уңыштарға ireш.

**Йыһат Солтанов**. 14.10.1963.

Йыл буйына айный алмай йөрөнөм был илереп-тилереүҙән, ә Рафаэль ҡорҙашымды донъялағы иң ҡәҙерле дуҫтарымдың береһе итеп күрҙем. 32-нсе йыл тыуғандарҙың утыҙ ике йәше тулған 1964 йылдың 3 декабрендә (үҙемдең тыуған көнөм) илһамланып ошо шиғырҙы яҙҙым:

## Утыҙ ике

*Ҡорҙашым **Р. Сафинга**.*

Утыҙ икене лә еткерҙек бит! —
Утыҙ ике тапҡыр Ер шары
Беҙҙең менән һыҙҙы түңәрәген,
Сорнап алды йәй һәм ҡыштарҙы.

Утыҙ ике тапҡыр, күк күгәртеп,
Беҙҙең өсөн яңы йыл тыуҙы.
Донъя ғәмен йыйған күңелдәрҙе
Шампанский йә үрт-йәш йыуҙы.

Утыҙ ике тапҡыр, өмөт итеп,
Күҙ аттыҡ беҙ төпһөҙ күктәргә.
Утыҙ ике тапҡыр һәм йөкмәндек
Ватан артҡан изге йөктәргә.

Утыҙ ике төрлө һөнәр тирҙек,
Утыҙ ике яҙмыш кисереп.
Һәм ышанам: беҙҙең саф йөрәктәр
Етмешкә лә беҙҙе еткерер[2].

Беҙҙең нәфрәт, беҙҙең мөхәббәттәр
Утыҙ икеләтә пак булды.
Күкрәктәрҙең күкрәп-тетрәүҙәре
Йондоҙланып күккә атылды.

---

[2] Күрәҙәлегем дөрөҫкә сыҡты: ҡорҙашым Рафаэль Сафин 2002 йылда — 70 йәшен тултырып китте был донъянан; ә мин иһә был хәтирәләрҙе 71-енсе йәшемдә яҙып ултырам.

Һөйөклө дуҫ, ләкин һөймәнек беҙ
Утыҙ ике төрлө ҡояшты.
Табында ла, ҡанлы яуында ла
Намыҫыбыҙ булды юлбашсы.

Тайпылманыҡ тоғро юлыбыҙҙан,
Аяҡтарҙы йылан саҡһа ла.
Шуға ла шул бөгөн күбебеҙҙең
Бәғерендә яра һаҡлана.

Һөйөклө дуҫ, тоғро дуҫым минең,
Ҡаршылайбыҙ ғүмер байрамын.
Утыҙ ике тапҡыр бирәбеҙ һүҙ
Тапатмаҫҡа Намыҫ байрағын.

Һин — Өфөлә, ә мин ауылымда,
Тик йөрәктәр тибә бер тигеҙ.
«Ҡояш алып ергә ҡайт!» — тиһәләр,
Менеп китер инек икебеҙ.

Һөйөклө дуҫ, икәү күтәрәйек
Икеләтә нурлы бокалды,
Утыҙ икенсе йыл тыуғандарҙың
Утыҙ ике йәше айҡанлы.

Һөйөклө дуҫ, утыҙ ике тапҡыр
Ант итәйек илде һөйөргә.
Көн килһә лә, ҡара төн килһә лә,
Халҡым өсөн, тиеп, еңергә!

Утыҙ ике әжәл кисермәбеҙ,
Ләкин беҙҙең кисҡән бер әжәл
Ил алдында антты үтәү булыр —
Халыҡ өсөн түгел бер ни жәл!

Һөйөклө дуҫ, тоғро дуҫым минең,
Күтәрәйек нурлы бокалды
Утыҙ икенсе йыл тыуғандарҙың
Утыҙ ике йәше айҡанлы!

3.12.1964.

Әҫәрҙәр ҙә бит донъяға үҙ яҙмышы менән тыуа. Был шиғырҙы «Йондоҙ ямғыры» йыйынтығыма керетҡән булһам да, дуҫым Рәми Ғариповтың һүҙен

тыңлап, алып ташлағайным, шунан һуң да ул бер ваҡытта ла матбуғатта сыҡманы. Әйткәндәй, шулай уҡ икенсе дуҫым Рафаэль Сафиндың хупламауы арҡаһында «Мостай Кәримгә» тигән шиғырым да ҡулъяҙмала килеш ятып ҡалды. Ә Рәмиҙең үҙе хаҡындағы бер нисә шиғырым, күпме генә боронғо һәм ныҡлы дуҫтар булһаҡ та, үҙе үлеп байтаҡ йылдар уҙғас ҡына яҙылды...

Рафаэль әйткән «һөйрәлеүсе ритм» тәү сиратта «Буранлы юлда» тигән шиғырға бәйле булып, төбәгемдең ҡарлы-буранлы алыҫ Тирәкле баҫыуы юлынан өшөп-ҡатып колхоз малдарына һалам ташыған саҡтарҙы иҫкә төшөрә. Атауылла дуҫым йөрөткән ҡарышлауыҡлы трактор, осһоҙ-ҡырыйһыҙ аҡ диңгеҙҙә тулҡындарҙы ярған карап һымаҡ, аҫҡа бер батып, бер ҡалҡып, эс бошорғос талғын дырылдап бара; тауышы бер көсәйеп, бер һүлпәнәйеп сыға; ә ҡарышлауыҡ табанлы «тимер ат» артында беҙ — санала бейек йөк башында буран өйөрмәһе эсендә һерәйешеп ултырып киләбеҙ. Шул хәрәкәт ыңғайына тракторҙың талғын ауазылай оҙон моң — һөйрәлеүсән ритмлы шиғыр үҙенән-үҙе ярала күңелемдә...



Йыһат, Сабит, Сания Солтановтар. 1965.

Рафаэль ҡорҙаштың баштан уҡ миңә һирпелгән йөрәк йылыһы һәм яҙғы беренсе ҡояш нурҙары тәьҫирендә һалҡын ҡарҙы тишеп сыҡҡан ныҡыш аҡсәскәләй бирешмәйенсә үркелеүсе талымһыҙ шиғриәтемде һәм, кеше буларак, үҙемде лә хөрмәтләүе, әйтә алам, оҙаҡ йылдарғаса һүрелмәй күңелемде биҙәне. Яҙыусылар берлегенә ағза итеп алынғанымда фатихалап биргән яҙыуы ла тап ошо хаҡта һөйләй бит:

*Яҙыусы Йыһат Солтановҡа СССР Яҙыусылар союзы агзалыгына* ***Рекомендация.***

*Мәглүм ки, яҙыусылыкҡа иң яҡшы рекомендация – ул яҙыусының китаптары. Йыһат Солтановты мин шагир итеп ныгыраҡ беләм. Уның "Йондоҙ ямгыры" исемле шигри китабы үҙе үк бик һәйбәт рекомендация.*

*Йыһат Солтанов тормош багажы ҙур булган, әҙәбиәткә үҙенең ныҡлы ҡарашы менән килгән, яҙыусының төп ҡоралы телде үҙенсә яҡшы белгән етди әҙип. Унан, шигри әҫәрҙәр генә түгел, ҙур күләмле проза әҫәрҙәре лә көтөргә хаҡлыбыҙ. Сөнки ул был өлкәлә лә етди заявкалар бирҙе.*

*Унан һуң миңә, Йыһат менән бергә эшләгән, уны, яҙыусы итеп кенә түгел, ә кеше итеп тә арыу уҡ белгән әҙәмгә, уның кешелек сифаттары ла ҡәҙерле. Уның менән яңы яҙылып бөткән әҫәрең һәм артабангы ижад пландарың хаҡында рәхәтләнеп һөйләшеп ултырып була.*

*Мин, 1960 йылдан биреле Яҙыусылар союзы агзаһы буларак, Йыһат Солтановҡа СССР Яҙыусылар союзы агзалыгына фатихамды бирәм.*

***Р. Сафин.*** 03.11.1970.

Ҡорҙашымдың хатындағы матбуғат таратыу тураһындағы нәсихәтенә килгәндә, әллә ҡасан уҡ, ауылыма ҡайтҡас та башлағайным ул эште. Даими алдыртҡан «Ағиҙел»емде үҙемдән һуң башҡаларға уҡыттым, «Совет Башҡортостаны» гәзитен, көндөкөн-көнгә ҡуша тегеп, ауылымдың китапхана уҡыу залының өҫтәлендә ҡалдырҙым. Башҡорт матбуғатына өйҙән-өйгә йөрөп өгөтләп яҙҙырттым. Бына шуға бер миҫал булырҙай хатым:

Һаумыһығыҙ, иптәштәр!

Бына мин һеҙгә тағы ла бер шиғыр ебәреп ҡарайым.

Ғинуар айында бер, февраль айында бер тапҡыр шиғырҙар ебәргәйнем, Рафаэль ҡорҙаш ни өсөндөр яуап яҙмай. Әллә өйҙә юҡмы? Әйберҙәрҙең редакция тарафынан нисек баһаланғанын белмәгәс, икеләнеп торам. Билдәһеҙлек.

«Ағиҙел» журналына ҡағылышлы бер-ике һүҙ. Колхозда беҙҙең бригаданан быйыл 23 кеше «Ағиҙел»гә яҙылғайны, ләкин, яңы йылдың инде өсөнсө айы китеүгә ҡарамай, беренсе һанын да күргәнебеҙ юҡ. Элемтә бүлеге: «Беҙ бер ни ҙә белә алмайбыҙ, Өфөнән ебәрмәй торалар», — тип яуап бирә. Тейешле урынға шылтыратып, бына шул мәсьәләне хәл итһәгеҙ ине. Эштәр былай барһа, киләһе йыл подписчиктарҙан ҡолаҡ ҡағыу мөмкин бит.

Иҫән булығыҙ, яуап яҙығыҙ. Бөтәгеҙгә лә ижади уңыштар теләп, **Йыһат**. 11.03.1964.

***

## Нурлы карап

*Рафаэль Сафин ҡорҙашҡа*

Хәтереңдә микән, Рафаэль дуҫ,
Өскөлләнгән осор — өс таған?
Аҡ күңелең кеүек яҡты бүлмәң
Хәтеремдә минең ныҡ ҡалған:

Коммунистик урам мөйөшөнән
Алға ашҡан ҡыры, ослайып, —
Фатирың бит дауыл яра ине
Хәрби карап кеүек мусланып!

Күренгәндер миңә, бәлки, шулай —
Хәрби моряк булған һантыйға.

Аҡ карапта йөҙгән, — их! — ул төндәр,
Күңелдәрҙе мансып яҡтыға!

Гиҙҙек өсәү нурлы карабында —
Рәми, Йыһат һәм һин, Рафаэль.
Беректерҙе беҙҙе әллә шатлыҡ,
Әллә хаҡлыҡ, әллә яфа гел?..

Гармуныңды тартып ебәрәһең
Йән һыҡтаған оҙон ғәмдәргә.
Күкрәгеңде телгән "Ҡолой кантон"
Килеп керә беҙҙең йәндәргә:

"Кантон да ғына кантон килә, тиҙәр,
Килгән кантондарҙан ҡаҡшаныҡ.
Яуыз кантондарҙы ҡуя икән
Рәсәй тигән яуыз батшалыҡ"...

Карабыбыҙ бара моңға тулап,
Моң һемереп беҙҙең йән ҡана.
Күҙҙәрҙән йәш беҙҙең тамған мәлдә
Ҡурайҙарҙан мәллә ҡан тама?..

Их Рафаэль! Изге-моңло төндәр!
Текә торған тура, ныҡ һының!
Рәми менән мине иҫәрләтеп
Төндәр буйы шиғыр уҡының.

Лермонтовты, Блок, Есенинды
Һинең аша астым яңынан.
Дөрөҫ булыр әгәр, сыҡтым, тиһәм,
Рафаэль һәм Рәми янынан.

Һабан һөрөп күнгән ерекмәнде
Алдығыҙ шул шиғри дуҫлыҡҡа.
Ауыр заманамда һеҙ булғанға
Ҡоламаным ҡола-бушлыҡҡа.

Ҡолар саҡта сөнки ике яҡтан
Ике дуҫтың тотто яурыны.
Шиғырыма һеҙ күрһәткән һаҡлыҡ
Хаҡлыҡ булып бик йыш яңраны.

Таң аҡтансы уҡып сығыуығыҙ
Повесымды, проза булһа ла!..
Икәүләшеп иртән "Ағиҙел"гә
Илтеүегеҙ! — Бына был далан!

Даланлы мин һеҙҙең далан менән,
Ике дуҫым, ике ҡорҙашым.
Рафаэль дуҫ, нурлы карабыңда
Нурға сумды әллә юл башым.

22.07.1999.

## Ишеттем мин...

*Ҡорҙашым Рафаэль Сафинга.*

Ишеттем мин: китәбеҙ икән
Изге инсан китеүе менән.
Күтәрәйек асы бокалды,
Үлмәҫ өсөн йәмһеҙ үлемдән!

Был донъяла дөрләп ҡабынғас,
Тура килһен гөрләп һүнергә.
Китһәк, әйҙә, йырлап китәйек,
Еңел булыр илгә күмергә!

Ямғыр яуһа — яуһын, ҡар яуһын,
Ҡара ләғнәт өҫкә аумаһын.
"Гөнаһ шомлоғо, — тип, — атайҙар", —
Бала-саға илап ҡалмаһын!

Тапланмаһын яман исемгә
Беҙҙе белгән йыр һәм ер йәме.
Беҙҙән һуң да йәнде тилертһен
Беҙ татыған икмәк, тоҙ тәме!

1963.

## ИЛШАТҠА 85

## Талантлы менән талымһыҙ тулғаныуҙар

Ҡорҙашым Илшат Йомағоловто белмәгән кеше юҡтыр. Аллаһы Тәғәләнән һәр яҡлап мул йәлсетелгән талант эйәһен – үҙе артист, үҙе драматург, үҙе ағымлы шәхесте һағналар, һағынырҙар, йылдар үткән һайын нығыраҡ юҡһынырҙар.

Артислығына килгәндә, әйтеп тораһы ла түгел; драматургияһын бизмәнгә һалһаҡ, бына, мәҫәлән, үҙем, Илшат менән бер үк замана ҡәләмдәше булараҡ, һигеҙ драма яҙып һәм интернет аша уҡыусыларыма еткереп тә, сәхнәгә менгәндәре юҡ, ә унын пьесалары иһә (бигерәк тә «Нәркәс»е) бик күп театрҙарҙа шаулап барҙы, бара һәм барасаҡ...

Замананың асы хәмере күптәребеҙҙең тешен ярып керһә лә, беҙ унын менән «закадычный» дуҫтар булманыҡ, бер бокал да сәкәштермәнек, бер табында ултырып сәй эсмәнек, һирәк-мирәк һәм осраҡлы күрештек, ә шулай ҙа араларыбыҙ йылы, телмәребеҙ эскерһеҙ, күңелдәребеҙ асыҡ һәм ихлас ине.

Бер мәл әҙәби ағай-эне араһында шаҡтай әҙәпһеҙ имеш-мимеш таралды: Ырымбурҙан килгән Йыһат Солтанов, башҡорт булып йөрөһә лә, паспортында татар икән, алдаҡсы бәндә, тимәк (ғәйбәт эйәһен дә белдем). Милләт алмаштырыу миңә ят нәмә – күңелде ҡыйырһытты...

Күп тә үтмәне, ҡәләмдәштәр төркөмләнгән бер ҡорҙа Рәшит Солтангәрәйев тигән ҡәләмдәшем, шөйлә мут йылмайып, күҙемә текләп баяғыны һораны:

-- Паспортыңда милләтең татар, тиҙәр, шул дөрөҫмө? – Унын өсөн «оло ағай»ҙың милләте генә бар ине, фәҡәт минең йәнемә тейеү өсөн генә әйткәндер...

-- Эйе, -- тинем, -- минең башҡорт, татар, сыуаш, мари, удмурт тип яҙылған бер юлы биш паспортым бар, ҡайһы урында ҡайһынынһы кәрәкһә, шуныһын сығарып һалам!

Илшат мине урамда шаяртып ҡаршыланы:

-- Йә ҡорҙаш, биш милләтеңдең ҡайһыһы атаң-әсәңдеке? – Аптырабыраҡ ҡалғас, йылмайып аңлатып бирҙе:

-- Бер көн Рәшит Солтангәрәйев: «Һеҙ ҡорҙаштар – яҡшы беләһеңдер, Йыһат Солтановты татар тиҙәр, ысынмы шул?» тип йөҙәткәс, асылын әйтеп бирҙем: «Татар яһар өсөн Йыһат Солтановты ете татар менән ҡуша бер ҡаҙанға һалып, ете ҡат ҡапҡасын ябып, ете көн, ете төн буйына ҡайнатҡандан һуң да ҡапҡастарын асып ебәрһәң, ете быуын шәжәрәһен әйтеп, әсәнән тыумаса башҡорт көйөнсә боҡорҙап килеп сығыр, артынса уҡ ете татар ҙа бер юлы «без башҡырт!» тип һөрәнләр! – Ихлас шарҡылдап көлдө.

Милләт тигәндән, иң мөһиме ул түгел – үҙеңде кем тойоуың һәм кемгә хеҙмәт итеүең мөһим, әлбиттә; әммә төҫ-ҡиәфәте, холҡо, ағымлы-һутлы теле буйынса Илшат Йомағолов, 1932 йылдың 26 февралендә хәҙерге Күмертау районындағы Тимербай тигән татар ауылында тыуған уҙаман, башҡортмон тигәндәребеҙҙең күптәренән башҡортораҡ ине; ул ваҡытта башҡорт академия драма театры сәхнәһендә лә иң саф башҡорт теле унын ауыҙынан яңғырай ине. Шул йәһәттән көлә-көлә Илшат үҙе әйткән һүҙҙәр иҫемдә:

-- Ҡарт әҙип Сәғит Агиш: «Башҡорт академия драма театрында ысын академияса иң таҙа башҡорт телендә һөйләшкән бер артист бар, ул да булһа татар Илшат Йомағолов» тип мәрәкәләй...

Ул замандарҙа партия обкомы, КГБ теңкәгә ныҡ тейҙе, башҡорт ҡурайына, башҡорт оҙон көйҙәренә, башҡорт теленә ҡарата ҡыҫым көсәйҙе. Шул шауҡымдан, ахырыһы, башҡорт академия драма театрының иң күренекле артистары, бер-бер артлы, уның данлы сәхнәһенән тайҙыртылды, шул иҫәптән Илшат Йомағолов та хәләл ефете Миңзәлә Хисамова (күренекле артистка) менән Ҡазан театрына китеп барҙы һәм мин уларҙың икеһенең дә саф татар телендә ифрат оҫта итеп уйнауҙарын телевизорҙан күреп һоҡландым, талант эйәләренең тыуған ерлегенән ҡыйырҺытыуҙарын күңел күтәрә алмай ине, әлбиттә. Ләкин ике-өс йылдан һуң уҡ икеһенең дә, ауыҙҙары бешеп, тигәндәй, тыуған театрға кире ҡайтыуҙары ишетелде. Ҡылыҡтарына бераҙ күңел ҡырылып йөрөгәнгәме, тәүге осрашыуҙа ҡырыҫ өндәштем:

-- Йә ҡорҙаш, тиҙ еләнең, ашҡыныуың ашнаҡһыҙ булдымы әллә?

-- Эй Йыһат, үҙебеҙҙең ерҙән дә ҡәҙерлеһе юҡ икән ул. Күрмәгәнемде күрҙем: бер-береһенең боғаҙын сәйнәп өҙөргә генә торалар. Татарға ҡәберең яҡын булмаһын!

«Һандуғас» тигән бер поэмамды, әллә ни иҫ китерҙәй заманса булмаһа ла, радиокомитетҡа илтеп биргәйнем, кемдән уҡытырбыҙ икән, тигәстәре, мөмкин булһа, Илшат Йомағоловтан, тинем. Ҡорҙашымдың эштәре муйындан ине, иң-иң күренеклеләрҙең әҫәрҙәре эфирға уның башҡарыуында сыға ине, минекенә сират етмәҫ, тип һананым, әммә икенсе аҙнаһына уҡ «Һандуғас»ым уның илһамлы уҡыуында арыу ғына рәүештә эфирҙан һайраны...

Талант эйәһенең ғүмере ахырында урам аша ғына күрше йәшәнек; үҙ ғүмерендә бер-нисә ғаилә ҡорһа ла, ул инде буйҙаҡ ине; уңалмаҫлыҡ сиргә һабышҡан яңғыҙ башы бер бүлмәле фатирҙа ҡаңғыра ине. Ҡаршыла ғына автобус туҡталышы, шунда йыш күрешәбеҙ, кинәнеп һөйләшәбеҙ. Баҡты иһәң, «шифалы корея карауаты»на заказ биргән, мине лә шул «әжәл даруы»нан файҙаланырға саҡыра. Аҙаҡ үҙе үк сәйер һөҙөмтәгә килде: «Хәйер, ҡайһы тарафҡа осорға ярҙам итер ул карауат?.. Оҙаҡ йәшәнек бит, әй, инде үлергә лә ваҡыт – етмеш биш йәшкә еттек бит, ҡорҙаш!

Өндәшмәнем, сөнки ундай тойғо миңә ят ине, нисә йәштә икәнемде иҫләп тә бирмәй инем.

Оҙаҡламай ҡайғылы хәбәр килде: корея карауатында ятҡаны килеш, ҡулын телефон трубкаһына һуҙып, бер кемдән дә ярҙам һорай алмайынса, яҡты донъянан күскән...

27.02.2017.

## Эҙәрлекләнгән әҙип

Был донъяға һәм донъялағы бөтөнөбеҙгә, бөтөнөбеҙгә лә мәңге ғашиҡ булып яҡты донъяға килгән, мәңге ғашиҡ булып донъяла йәшәгән һәм шулай уҡ мәңге ғашиҡ көйөнсә үк был донъянан күсеп киткән аҡыҡтай аҡ күңелле (үҙе әйтмешләй, “аҡ елкәнле”), аҡ һөттәй пак намыҫлы, йәненә һис тынғы бирмәҫ ҡайнар йөрәкле уҙаман ағайыбыҙ — башкорт халҡының арҙаҡлы ысын улы, мәшһүр шағир, прозаик, публицист һәм драматург, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре, кешелек донъяһы тарихындағы иң дәһшәтле бөйөк Ватан һуғышында дәһшәтлеләрҙән дәһшәтле, изгеләрҙән изге Сталинград алышының тап уртаһынан, тамуҡ уты эсенән Еңеп сыҡҡан ҡаһарманы — шундағы данлы 62-се армияның 124-се айырым уҡсы **Башҡорт бригадаһы** яугире Ғәйнан ағай Ғимазитдин улы Әмириҙең тыуыуына ла бына инде ошо мәҡәләне әҙерләгән 2017 йылда 106 йыл тулды. Үҙе яратып әйтә торған “аҡ елкәнле”ләр араһында тығыҙ елгә йәш “елкән”дәрҙең кирелешен тап таһыллы капитандай даими барлап-ҡанатландыртып торған был хәстәрлекле оло шәхестең 1982 йыл 8 октябрҙә көтмәгәндә, Ватан һуғышы ҡырында атакаға барғанында пуля тейгәндәй, ҡапыл сәсрәп ауыуы намыҫлы бөтә йәмәғәтселекте шаңҡытты, республикабыҙҙың барлыҡ гәзит һәм журналдарында йөрәк өҙгөс ҡара ҡаймалы матәм мәҡәләләре баҫылып сыҡты, шуларҙың иң тетрәткесе — мәрхүмдең тоғро окопташтарының 10 октябрҙә Мәскәүҙән һуҡҡан телеграммаһы ине:

*“КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетына. Вафат булған Ғәйнан Әмириҙең Сталинград оборонаһы буйынса яугир ҡорҙаштары уның ғаиләһе һәм яҡындары, республика йәмәғәтселеге менән бергә тәрән ҡайғы кисерә. Волга буйындағы бөйөк бәрелештең утлы-гәрәсәтле бөтә биш айы дауамында Әмири* ***Башҡорт уҡсы бригадаһы*** *сафтарында өҙлөкһөҙ һуғышты. Ватандың ҡаһарман улының ҡәбере алдында баш эйәбеҙ һәм Сталинград армияһы ветерандары Советының тәрән ҡайғы уртаҡлашыуын мәрхүмдең ғаиләһенә еткереүегеҙҙе һорайбыҙ. Генерал-полковник* ***В. Греков****”.*

Рәсми некрологка, беренсе булып, КПСС өлкә комитетының беренсе сәркәтибе М.З. Шакиров иптәш үҙе ҡул ҡуйҙы, йыназала мәрхүмдең башы осонда партия һәм хөкүмәт етәкселеге вәкилдәре ҡайғылы баш эйеп торҙо. Былар бөтәһе рәсми даирәләр тарафынан Башҡортостандың халыҡ шағирына йәки яҙыусыһына ғына (ә был дәрәжәләр уға, ҡырҡлата лайыҡлы булһа ла, тәтемәне...) күрһәтелә торған, ләкин бик һуңлап килгән үҙенә айырым хөрмәт, үкенес билдәләре ине...

Ғүмер тигәнең, ысынлап та, халыҡ үҙе әйтмешләй, аҡҡан һыуҙай, иҫкән елдәй елеп кенә үтә лә үтә икән: шул арауыҡ эсендә Ғәйнан ағайҙың 75 йыллығы ла, 80 йыллығы ла, 85, 95, 100, 105 йыллыҡтары ла һиҙҙертмәҫтән тулып та үтеп торҙо. Ҡәләмдәштәребеҙҙең яңы заман йылғырҙары (һай, афариндар ҙа инде!), әйтәйек, 40 йәштән үк башлап һәр биш йылы һайын “шанлы” юбилейҙарын сәхнәлә лә, матбуғатта ла шаулатып-гөрләтеп уҙғарҙылар, һәм шундай уҡ әшнә-мәрхүмдәре йәшәп киткән, тупһаларында эҙҙәре лә һыуынмаған йорттарға (Аллаға шөкөр!) иҫтәлекле таҡтаташтар, ҡәберҙәренә лә һәйкәлдәр ҡуйылды, музейҙары асылды, хатта ҡала урамдарына исемдәре бирелгәндәре лә бар. Әммә арҙаҡлы әҙип, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Ғәйнан Әмириҙең иҫтәлегенә

бындайҙарҙың береһе лә тәтемәне, әйтерһең, һыуға батҡан балталай онотолдо (дөрөçөрәге, онотторторға тырышылды). Ғүмеренең ахырынаса уны һәм унының һымаҡ уҡ башҡаларҙы һыйындырып йәшәткән Ленин урамындағы 2-се һанлы йорттоң (иншАлла!) буйынан-буйына шаҡмаҡлап беркетелмеш һәм әҙиптең күренекле ҡорҙаштарының исемдәрен мәңгеләштермеш мәрмәрташтар араһында әлегәсә Ғәйнан Әмири исеме юҡ. Яҙыусылар берлеге бер осорҙа, Хоҙай биргән форсаттан файҙаланып, мәрхүм әҙиптәребеҙҙең ҡәберҙәренә (хатта төпкөл районтарҙағыларға ла), Эстәрлетамаҡ оçталарынан юндыртып яһатып, әҙәм рәтле яҙыулы таштар ҡуйҙыртты, шуның менән бик күп һауаптар алды. Әммә абруйлы ижади берлегебеҙ ни бары бер Ғәйнан Әмиригә генә бындай һәйкәлде ҡыҙғанды; уны, шул уҡ Эстәрлетамаҡтан, үҙ аҡсаһына яһатып, ылауын да үҙе яллап, унының бер туған кейәүе Ленис Нурми улы Асаев уҙаман үтәне. Вафатына өс йыл тигәндә, әгәр ҙә ки ҡәҙимгесә әҙәмдәрсә ҡыланһаҡ, матбуғатта ғына булһа ла 1991 йылдың авгусында 80 йыллығы билдәләнергә тейеш ине, ләкин үҙебеҙҙең башҡорт телендәге республика матбуғаты, күренекле был датаны, белмәмешкә һалышҡандай, өнһөҙ-тынһыҙ үткәрҙе, сөнки редакцияларыбыҙҙағы ҡайһы бер әһелдәребеҙ, тарихтан наҙанлыҡмы, әллә үҙҙәренә хас күңел тарлығымы күрһәтеп, мәрхүмдең исеме тирәһендә бәғзе бер ҡара йәндәр тарафынан ҡуйыртылған ғәйбәткә биреллеләр (бының асылын һуңғараҡ аңлатырбыҙ), атаҡлы башҡорт әҙибен, теләйҙәрме-теләмәйҙәрме, әҙәбиәттең “татар” кәштәһенә һалып ҡуйҙылар (миңә ҡалһа, әҙип милләтенә ҡарап баһаланмай!). Шул уҡ ваҡытта, әллә ғөмүмән киң күңеллелек күрһәтепме, әллә үҙенең матбуғат бурысын теүәл үтәпме икән, татар телле гәзитебеҙ генә ошо изге иçтәлеккә ишеген асыҡ ҡалдырҙы: юбилей айҡанлы мәшһүр шағир Яҡуп Ҡолмойҙоң игелекле ҙур мәҡәләһен республика уҡыусыларына бик матурлап еткерҙе (“Ҡызыл таң”дың 1991 йыл 21 август һаны).

“Татар” тигәндән, тормошта һәм әҙәбиәттә “башҡорт” кеүек үк берҙәй мәғәнәгә эйә һәм ғәйепһеҙ был «билдә» Ғәйнан ағай яҙмышында, унының ижадына ҡара яла яғыу хөсөтөнә әүерелеп, хәтһеҙ ауырға төштө – көтмәгәндә йөрәге ярылып үлеүе лә, моғайын, шунын касафатылыр...

Ғәйнан Әмири үҙенең бөтә булмышы, йәне-тәне, тынғы белмәç аҡ күңеле менән бөтөн кешелеккә, бигерәк тә беҙҙең ише елкенеп-талпынып ҡәләм тибрәтеүсе йәш шағирҙарға һис кенә лә һүрелеүҙе белмәүсән ғашиҡ ине. Беренсе шиғри китабыма бөркөлдөргән йөрәк йылыһын әлегәсә тоямын:

«Йыһат туғаным!

Бына «Йондоҙ ямғыры»ның корректураһын ҡарап сыҡтым. Сыҡтым да шатлыҡтарға сумдым: «ниндәй ғәжәп китаптың редакторы булыу бәхете төшкән минең өлөшкә!» — тинем.

Ысынлап та ғәжәп китап был! Кескәй генә ул. Әммә — имән сәтләүегe кеүек кескәй. (Шундай сәтләүектән дәһә, таш-ҡаяға баçып, ел-дауылдарға баш эймәй, ғорур шаулап торған мәңгелек имән үçеп сыға).

Ғәжәп китап был. Кескәй генә ул. Уға тупланған шиғырҙар ҙа ваҡ ҡына. Тик улар йә ынйы бөртөгө кеүектәр (ынйы бөртөгө бик ваҡ — ә ниндәй ҡиммәтле!), йә бойҙай орлоғолай (яҙын ул «ҡулына йәшел ҡылыс тотоп сығасаҡ»!), йә тылсымлы

бөрөләй. Эйе, был китапта бөрөләр ҙә күп. Ләкин тамсы ла шикләнмәҫкә мөмкин: улар мотлаҡ япраҡ ярырҙар, сәскә атырҙар — ил күрке булып гөрләрҙәр.

Ғәжәп китап **бу.** Халыҡсан. Просто халыҡсан ғына түгел — **башҡортсан!** Унда, уның һәр юлында (тиерлек) башҡорт йөрәге тибә, башҡорт һулышы бар; уның уйы, хисе — бөтәһе лә һинең, Йыһат туғаным, башҡорттоң бик оло йырсыһы булып күтәреләсәгеңә, осасағыңа шикләнмәйем! Һәм был һүҙҙәрҙән һинең башың әйләнеп китмәйәсәген дә беләм. (Бөркөт балаһын космосҡа алып менһәң дә, уның башы, моғайын, әйләнмәҫ ине).

Тағы нимә тим?

Миңә хәҙер 59-ынсы йәш. Йылтырауыҡ тәтәй күреп сәбәкәй саба торған сағым үткән. Ынйыны ябай быяланан айыра беләмдер тип уйлайым.

Хоҙайым, һиңә сәләмәтлек, оҙон ғүмер бирһен. Бер ҡасан да ваҡлана күрмә, гел генә шулай эре булып йәшә.

Ҙур ышаныс менән —

**Ғәйнан Әмири.**

10.10.1969».

Уның игелеге тейгән, бөркөтләнеп осорға ул ҡанат ҡуйған күптәребеҙ араһынан сағыу йондоҙобоҙҙоң — Башҡортостандың халыҡ шағиры булып танылған, ләкин ул саҡта (1950 йыл) ҡауырһыны ла ҡатмаған йәш үҫмер Рәми Ғариповтың шиғриәттәге беренсе аҙымдарын фатихалаусы ла ул. 10-ынсы синыф уҡыусыһы ҡулы менән ылғый ғына үҙ тормошонан алып яҙылған һәм «роман» тип билдәләнгән, ике ҡалын дәфтәрҙән хасил ҡулъяҙма алдыбыҙҙа -- “Бабай” ҡушаматлы үҫмер Рәми Ғариповтың (икенсе дәфтәрҙә ул үҙен Рәми Салауатский тип тә атай) ғәмәлдә бик ентекле көньяҙмалары. Персонаждар тормоштағы үҙ исемдәрендә, фәҡәт төп геройҙар Рәми үҙе лә уның тәүге мөхәббәте Мariят ҡына Вахит һәм Айһылыу итеп үҙгәртелгән; ваҡыт-ваҡыт текста улар үҙ исемдәрен (Рәми, Марият) ала; йәш шағирҙың һөйөклө остазы Ғәйнан Әмиригә хаттары ла Рәмиҙең үҙ исеменән яҙыла, ә әҫәренең эпиграфы итеп Ғ. Әмири шиғырын алыуы — үҙе үк күп нәмә хаҡында һөйләй. Рәми-Вахит, әлбиттә, шиғриәт менән ныҡ иҫерек, был йәһәттән уның берҙән-бер рухи терәге-таянысы (үҙе әйтмәшләй, «штурманы») — Ғәйнан ағаһы ғына...

Һәм бына Ғәйнан Әмириҙең әҙәбиәттә йәш таланттарҙы үтәләй күреүе, үлсәй белеү маһирлығы, бизмәненең теүәллеге (Рәми Ғарипов тураһында иҫтәлектәр йыйынтығынан: Хөснулла Түләкәйев. Кешелә ине эше.):

«Күмертау ҡалаһында йәшәгәнемдә, Өфөнән Ғәйнан ағай Әмириҙән кескәй бандероль алдым. Асһам, һинең (Рәми Ғариповтың. – Й.С.) «Һабантурғай йырҙары исемле китабың сыҡҡан икән дә -- Ғәйнан ағай миңә шуны ебәргән. Китаптың аҡ битенә түбәндәге һүҙҙәр яҙылғайны:

«Хөснулла туғаным!

Бына һиңә Рәмиҙең яңы китабын бүләк итеп ебәрәм. Үҙе ебәреп өлгөргәнсе уҡый тор. Китапта һиңә бағышланған «Торналар» бар. ***Рәми ул — ҙур талант! -- башҡорт халҡының ысын 5-енсе халыҡ шағиры буласаҡ кеше.*** Әйтте, тиерһең. Ғәйнан Әмири. 17.X.1964 йыл».

Ысынлап та, ҡарағыҙ: Башҡортостандың «указлы» халыҡ шағирҙары исемлегендә халыҡ шағиры Рәми Ғарипов нәүбәттәге ***бишенсе*** урында тора — «күрәҙәсе» Ғәйнан Әмири 1964 йылда уҡ күрә белгән, әйтеп биргән буласаҡ ысын халыҡ шағирын!

Бына хәҙер инде үҙем Ғәйнан ағай йәшенән күпкә уҙып киттем, ижадым буйынса уның ҡорҙашы булдым, уның менән яу ҡырындағы бер үк рота һалдатына әйләндем...

“Һуғышта шулай була торғайны, — тип яҙа ағайыбыҙ, — һөжүм һуғыштарынан һуң иҫән ҡалған һалдаттар һәләк булған дуҫтарының яҡындарына хаттар яҙалар, ҡайһылай батыр алышҡанлыҡтарын бәйнә-бәйнә һөйләп, иптәштәренең иҫтәлектәрен мәңгеләштерергә, уларҙың туғандарының ҡайғыларын еңеләйтергә тырышалар ине.

Бер-нисә ваҡыттан һуң — тағы һөжүм операциялары. Бынһында инде был хаттарҙың авторҙары баштарын һала... Был юлы иҫән ҡалғандар уларҙың үҙҙәре хаҡында яҙалар.

Был изге эш ротала һуңғы һалдат ҡалғанға тиклем шулай дауам итер ине.

Дүрт йәштәштән мин яңғыҙым ҡалдым. Ваҡытһыҙ сафтан киткән ҡәләмдәш-көрәштәш дуҫтарымдың ҡайһылай итеп батыр алышыуҙары тураһында хаттарҙы инде мин яҙырға тейешмен”... (Ғ. Әмири. Аҡ елкән. 146-сы бит).

Минең дә, роталағы тере ҡалған һалдат Йыһат фәҡирегеҙҙең дә, тим мин, биш-алты ҡәләмдәш-яуҙаш хаҡында шулай уҡ яҙаһым бар... Хәҙергеләргә һәм килерҙәргә ғибрәт өсөн шул хаттарҙың беренсеһен яҙып ултырам бына...

“Беҙ — ғәйнәләр, — башҡорттоң төбө булабыҙ”, — тип бәйән ителә Башҡортостаныбыҙҙың төньяғында һәм ут күрше Пермь өлкәһендә аҫабаланып йәшәүсе Ғәйнә ырыуы башҡорттарының донъяға билдәле мифында. Ғәйнан ағай Ғимазитдин улы Әмиров (Ғәйнан Әмири) 1911 йылдың 25 августында хәҙерге Яңауыл районының Яңы Уртауыл (Янтыҡ) ауылында тыуып, тап ана шул “башҡорттоң төбө” булмыш Ғәйнә башҡорто ине. Бала сағынан уҡ күңелен әҙәбиәт ғашиҡ итә, ауыл башланғыс мәктәбендә уҡығанда ла, Бөрө педагогия техникумында ла ҡульъяҙма журналдар сығарыуҙы башлап ебәрә, 1928 йылдан алып әҫәрҙәре Өфө һәм Ҡазан гәзиттәрендә баҫыла, утыҙынсы йылдар башында тәүҙә — “Коммуна” гәзитенең яуаплы сәркәтибе, шунан һуң “Йәш коммунар” һәм “Ленинсы” гәзиттәренең мәҙәниәт бүлеге мөдире булып эшләгән осоронда ижад ителгән “Кәмһетелгән Шәмситдин, трудденһыҙ Нуритдин” тигән беренсе поэмаһы уҡ уға танылыу килтерә заманында. Бөтәһен дә тормоштан алып яҙыусан ҡәләм эйәһе 1933 — 1935 йылдарҙа Ҡыҙыл Армия сафтарының кесе командиры булып хеҙмәт итеү осоронда ла ғүмерен елгә осормай — 1936 йылда яугир рухлы “ҡыҙыл әрмис хикәйәләре”нән хасил “Ауғус төнөндә” тигән өсөнсө китабы донъяға сыға. Армиянан ҡайтыуы менән үк Башҡорт педагогия институтында белем алыуын дауамлап, уны тамамлағас та уҡ, 1938 йылда Башҡортостан тел һәм әҙәбиәт институтына фольклор секторы мөдире итеп эшкә алына. Шунда башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижадын тәрәндән өйрәнә, башҡорт фольклорын йыйыу буйынса ғилми экспедицияларҙа ҡатнаша, башҡорт

әкиәттәрен, йырҙарын китап итеп баҫтыртып сығарыуҙа, Батыр Вәлид, Фәррәх Дәүләтшин, Йәрми Сәйете кеүек хәҙерге заман башҡорт сәсәндәренең ижадын юлға һалыуҙа тырышып эшләй, уларға ныҡ ярҙам итә. Шул арҡала үҙенең бөтөн әҫәрҙәре лә, тип әйтерлек, сағыу башҡорт фольклорына, халыҡсанлыҡ аһәңенә мул һуғарылған, былар уның хикәйәләүенең һәм тасуирлауының үҙенә хас колоритлы стилен тәьмин иткән. Бигерәк тә Урал артына сәйәхәттәре яҙыусының күңелендә һүрелмәҫлек сағыу тәьҫораттар, хәтирәләр булып ярылып ҡала, шунда йыйылған бай тарихи һәм ғәмәли материал уны ғүмере буйынса уйландырып, һөҙөмтәлә "Атлы халыҡ" тигән затлы очергын, атаҡлы "Мораҙым" повесен (роман тиергә лә була), "Башҡорт толпарҙары» балладаһы һәм "Салауат аманаты" поэмаһы кеүек шиғри әҫәрҙәрен яҙырға илһамландыра һәм, ысынлап та, үҙен "башҡорттоң төбө" итеп тойоу ҡеүәһен нығыта. 1939 йылғы баяғы "Атлы халыҡ"та ул оҙаҡламай бөйөк Ватан һуғышында тиңһеҙ данланасаҡ Башҡорт а**тлы дивизияһы т**өҙөлөрөн дә алдан күрҙе — күрәҙәләне һымаҡ...

Оборона Халыҡ Комиссары (Сталин) ҡарамағындағы ғәскәри берләшмәнең элемтә башлығы капитан Ғәйнан Әмиров 1946 йылдың ғинуарында хәрби хеҙмәттән бушатылып, шунан элегерәк, 1944 йылда, Ҡафҡаздың Ахал-Теки ҡалаһындағы хәрби госпиталдәрҙең береһендә һуғыш яраларынан дауаланып ятҡанында танышып өйләнешкән Сара еңгәй, 1945 йылда тыуған игеҙәк ҡыҙҙары Лилиә, Нелли, үгәй улы Ефим һәм ҡайнатаһы Семен Мильман менән шау-гөр килеп Өфөгә ҡайтып төшә. Шул айҡанлы мәрәкәсе ҡәләмдәше Сәғит Агиш уйынлы-ысынлы көләмәсен тарата: "Был донъяла бармаҡтар ҙа, кешеләр ҙә тигеҙ түгел икән, әй. Бөйөк Ватан һуғышынан капитан Н. немецтың еңел автомобиле "Оппель"дә өйөнөң эсен йыһазларлыҡ затлы байлыҡ тейәп ҡайтһа, капитан Ғ. тау аҫтындағы вокзалыбыҙҙан, алаша ат еккән ылау яллап, бер арба йәһүд сиреүен тейәп күтәрелде"... Көләмәстең тарихи ерлеген икенсе бер реалист әҙибебеҙ, шулай уҡ Сталинград яугире Ибраһим ағай Абдуллиндың хәтирәләрендә күрәбеҙ: "Минең тиҫтерҙәрем Яҡуп Ҡолмой, Ғәли Ибраһимов, Мостай Кәрим, Сабир Кинйәкәй — фронтта, ә Назар Нәжми Новосибирскиҙа КГБ мәктәбендә "смерш"лыҡҡа уҡый икән. Йәйәләр эсендә әйтеп үтәм: "Смерш" — ул "смерть шпионам" тип атала ине, ә һуғышҡа саҡлы ул "ОО" — особый отдел булып йөрөнө. Назар фронтта ла ана шул "Смерш"та хеҙмәт итте; беҙ инвалид булып, ҡултыҡ таяҡтары менән фронттан ҡайттыҡ, ә ул Германиянан бер машина трофей тейәп ҡайтты. Нишләйһең бит, кемгә һуғыш — ҡан түгеү, кемгә — майлы аш... Мин бының менән талантлы шағир Назар Нәжмигә ғәйеп ташларға теләмәйем, тик уның хәрби яҙмышы һәм һуғыштан һуңғы булған яҙмышының еп-еңел, шып-шыма булыуын ғына әйтеп үтеп китәм" ("Ағиҙел", 1997/4, 23-24-се биттәр).

Ҡайтып төшкән айында уҡ (ишле ғаиләне аҫырарға кәрәк бит!) Ғ. Әмири Башҡортостан китап нәшриәтенең балалар-үҫмерҙәр әҙәбиәте бүлеге мөдире булып эшкә урынлаша, ә 1947 йылдың октябренән 1949 йыл аҙағынаса ул — "Үктәбер" (һуңғараҡ "Әҙәби Башҡортостан") журналының яуаплы редактор урынбаҫары. Яугир рухлы күренекле әҙип һәм һәләтле етәксене 1950 йылда КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының әҙәбиәт һәм сәнғәт секторы мөдире

итеп партия эшенә үрләтәләр. Ошо урында уның яҙмышы 1937 йылдың ноябренән үк әҙәбиәтебеҙ донъяһында юҡҡа сығып торған бөйөк шәхес Һәҙиә Дәүләтшина яҙмышы менән тығыҙ тоташа һәм әҙибә өсөн был хәйерлегә була. Сөнки ул, 1943 йылда тотҡондан ҡотолғандан һуң, ижады буйынса Башҡортостан Яҙыусылар берлегенә лә, гәзит-журнал редакцияларына ла ҡабат-ҡабат мөрәжәғәт ҡылып ҡарай, ләкин "халыҡ дошманы"на яҡты йөҙ күрһәтеүсе, хәленә кереүсе табылмай (күренекле шағирәбеҙ Кәтибә апай Кинйәбулатова әйтеүенсә, хатта ҡәләмдәше Зәйнәб апай Биишева ла уны, икенселәй тупһама аяҡ баҫма, тип бороп ебәрә). Был хәл аңлашыла ла: билдәле репрессияларҙан һуң партия өлкә комитетынан, НКВД органдарынан шөрләү өҫтөнлөк алды...

"Ҡыҫҡараҡ ҡына буйлы, йоҡа кәүҙәле, ғәҙәттән тыш ябай ҡиәфәтле һәм баҫалҡы Һәҙиә апа А.П. Чеховтың матур кеше тураһындағы идеалына артығы менән тап килә ине — уның йөҙө лә, уйҙары ла, кейеме лә гүзәл ине, -- тип хәтерләй Әмири. -- Беҙ кабинетҡа индек. Ултырыштыҡ. Иҫәнлек-һаулыҡ һораштыҡ. Һәҙиә апа үҙенең башынан үткәндәрҙе һәм әле ҡайҙа, нисек йәшәүе тураһында ҡыҫҡаса ғына һөйләп бирҙе, минең сәләмәтлегем менән дә ҡыҙыҡһынды... Бик тулҡынлана, ара-тирә йөҙө ағарып киткәндәй була, йә унда тимгел-тимгел ҡыҙыл таптар тыуа. Мин уны тынысландырырға тырыштым, пединститутта студент саҡтарыбыҙҙы, дөйөм таныштарҙы, уҡытыусыларҙы хәтергә алып, көлкөрәк тойолған бер-ике эпизодты һөйләп алдым; ул үҙен ҡулға алырға тырышты, күҙ йәштәре аша йылмайҙы"... (Ғ. Әмири. Аҡ елкән. 90 — 91, 100, 110-сы биттәр).

Ҡыҫҡаһы, уның "Ырғыҙ буйҙарында" тигән повесенең машинкала өс дана итеп баҫтыртылған ҡулъяҙмаһының бер данаһын Ғәйнан Әмири шунда уҡ үҙе уҡырға ала, ә ҡалған икеһен, Яҙыусылар берлеге идараһы менән телефондан һөйләшеп, тәжрибәле ике әҙиптән тиҙерәк уҡыттыртырға һәм (ыңғай) фекерҙәрен яҙҙыртырға килешә. Эште оҙаҡҡа һуҙмайынса, ул үҙе әҫәрҙе ҡулына ҡәләм тотоп, йотлоғоп уҡый башлай; был партия эшмәкәренең ҡулъяҙманы ни тиклем дә ентекле итеп, күңел биреп уҡығанлығын ҡулъяҙма биттәрендә ҡәләменең эҙҙәренән күрәбеҙ: машинистка ебәргән хәреф хаталарына тиклем, һүҙҙәр аҫтына һыҙып, бермә-бер күрһәтә барған, авторҙың буталсыҡ һөйләмдәрен (37, 114, 116, 121-се биттәр) хәстәрлекле төҙәткән (романдың баҫма тексынан күренеүенсә, автор был төҙәтмәләрҙе ҡабул ҡылған) һәм шул тәңгәлдәрҙә ҡағыҙ ҡырыйына: "Һәҙиә ханым, һөйләм төҙөүгә иғтибар итегеҙ! Ғ.Ә."; "нимәне?"; "русса ҡоролош"; "өтөрҙәрҙе дөрөҫ ҡуйыуға иғтибар итегеҙсе!"; "Һөйләм!"; "һәйбәт!" тигән һүҙҙәрен теркәп ҡалдырған... "Ҡулъяҙманы ошо уҡыу, яҙмышын хәл итеү дәүерендә, эҫе йәй көндәрендә, — тип хәтерләй бөйөк әҙибәбеҙ менән айырата йылы мөнәсәбәттә булған Кинйәбулатова Кәтибә апай, — Һәҙиә апайыбыҙ Ғәйнан ағай менән күрешеп һөйләшергә баш ҡалаға йыш ҡына килеп йөрөнө[3]... Тәүгеһендә уның эштән сығыуын өлкә комитет йортоноң ишеге төбөндә көтөп торған икән, был хәл Ғәйнан Әмириҙе ныҡ һағайтҡан, сөнки "халыҡ дошманы" тип тамғаланмыш кеше менән осрашыуы хәүефле (бигерәк тә партия

---

[3] Ул һөйләгәнде яҙып бармағанлыҡтан, һүҙмә-һүҙ түгел, ләкин дөрөҫ мәғәнәһендә килтерәм.

эшмәкәренә!) — элекке яҡын таныштары ла бит уны, Һәҙиә апайҙы, күрмәҫкә лә белмәҫкә тырыша ине. Мәҫәлән, шул саҡтарҙа күҙгә яҡшы ғына салына башлаған ярһыу коммунист-әҙибә З. апайҙың фатирына Һәҙиә апай менән эйәртенешеп барғаныбыҙҙа ул беҙҙе: "Йөҙөмә ҡара яғып тертәңләп йөрөмәгеҙ!" — тип, ишектән бороп ебәрҙе; ә Башҡортостан яҙыусыларының 1954 йыл июнь айындағы 2-се йыйынына "әҙәбиәт һөйөүселәр" төркөмөндә генә саҡырылған Һәҙиә апай залға инеп, минең менән З. апай эргәһенә килеп ултырғас, ҡобараһы осҡан З. апай, тиҙ генә тороп китеп, икенсе урынға шылды... Бына шундай тынсыу мөхиттә рәсми вазифа башҡарған Ғәйнан Әмириҙең һаҡлыҡ күрһәтеүен яҡшы аңлап була. Һәҙиә апайҙың үҙенең һөйләүенсә: "Яр башындағы баҡсағаса артығыҙға ҡарамай ғына барығыҙ, шунда осрашырбыҙ", — тип, уның ҡолағына шыбырҙап уҙған ул, баяғыса, ишектән сығып барышлайы. Ағастар араһында үләнгә ултырып һөйләшкәндәр. "Беҙҙең һәр беребеҙ күҙәтеү аҫтында тора бит, апа, — тип ғәфү үтенгән Ғәйнан ағай һәм инде бынан һуң уға эш урынына килмәҫкә, ә кистәрен, ил аяғы һил булғас ҡына, Ғ. Әмири фатирының ишеген ике тапҡыр шаҡырға һүҙ ҡуйышҡандар. — Үкенескә ҡаршы, өйгә саҡыра алмайым, сөнки үҙем дә, ҡыҫылып-мыҫылып, ишек төбөндә, тип әйтерлек, көн күрәм", тип тә өҫтәгән (фатир ғынаһы, ысынлап та, ҙур ғаилә өсөн тар ине)... Айырылышҡанда, кеҫәһенән сығарып, ҡағыҙға төрнәүле (эшендәге буфеттан өйгә алып ҡайтырға алған) һимеҙ селедка менән аҡ булка бүләк иткән апайыбыҙға; ә ул уны, апайыбыҙ миңә үҙе һөйләүенсә, юлда уҡ асып ашағыһы килеп, ауыҙ һыуҙары ҡойолоп, туҡталған фатирына саҡ ҡайтып еткән"... Шул уҡ К. апай иҫләүенсә, Һәҙиә апайыбыҙ былай тип тә өҫтәгән: "Ғәйнан Әмири ошонан һуң да, осрашҡаныбыҙ һайын, кеҫәһенә һалып миңә йә бешкән бәрәңге менән икмәк киҫәге, йә бер-нисә конфет менән печеньеләр килтерә, улар ифрат бөхтә итеп ап-аҡ ҡағыҙға төрнәлгән, еп сырмап бәйләнгән була"...

Шулай итеп, үҙенең эш-вазифаһы буйынса хәтәр рәсми кеше Ғәйнан Әмири әҫәргә ҡарата беренсе булып яҡшы фекер тыуҙыра һәм ентекле, хәстәрлекле ыңғай рецензия яҙа; йәнә килеп заманында күп авторҙарыбыҙҙың әҫәрҙәрен юҡҡа сығарып тәнҡитләүе менән хәүефле дан ҡаҙанған, "нигилист" тип тә нарыҡланған "татар" Әмир Чаныштың да рәсми яҙмаһы ыңғай була. Түрәләрҙең тын алышын һәм өҫтәнерәк иҫкән елдең көсөн сос тойоусан өсөнсө рецензиясы Сәғит Агиш ҡына, кемдеңдер аҫтыртын-баҫымлы һулышын ҡәләменән үткәреп, романды бөтөнләй юҡ итерлек оторо талаптар ҡуя, әммә партия өлкә комитетындағы әлеге иптәштең һулышы еңгәнлектән, "погода яһай» алмай...

"Роман мауығып уҡыла ине. Быға тиклем миңә башҡорт тормошонан был тиклем үк колоритлы, реалистик художестволы әҫәр уҡырға тура килгәне юҡ ине әле. Уны яҙыу өсөн авторҙың иҫ киткес ҙур, күп көс һалғанлығы ла билдәле ине миңә. Әммә шул уҡ ваҡытта китаптың теүәлләнеп етмәүе лә күҙгә ныҡ ташланып тора ине. Мин үҙемдең был осраҡта ябай рецензент ҡына түгел, ә партия өлкә комитеты исеменән фекер йөрөтөргә тейешлегемде лә аңланым... Унда әҫәрҙең бик күп ыңғай сифаттары әйтелде, әлбиттә, һәм шулай уҡ етешһеҙлектәре лә күрһәтелде, тәҡдимдәр яһалды, теләктәр белдерелде. Улар, нигеҙҙә, шуларға

ҡайтып ҡалалар ине: был килешендә ҡулъяҙма көнкүреш (бытовой) романы[4] булып тора; хикәйәләүҙең егерме йылға һуҙылған ваҡыт эсендә булып үткән тарихи ваҡиғалар фонында алып барылыуын иҫкә алғанда, әҫәрҙе күп темалы, тулы ҡанлы ысын социаль романға әйләндереү мөмкинлеге ап-асыҡ күренеп тора. Икенсенән, ошоға бәйле, Ырғыҙ буйы башҡорт крәҫтиәндәренең тормошон, уларҙың азатлыҡҡа ынтылыуҙарын, үҙҙәрен генә айырып һүрәтләү менән сикләнмәй, ысынбарлыҡта булғанса, башҡорт ярлыларының көрәшенә тирә-яҡта йәшәгән башҡа халыҡтарҙың, айырыуса Самар ҡала пролетариатының революцион хәрәкәте йоғонто яһауын да күрһәтеү бөтә яҡтан да уңышлы булыр ине" (Ғ. Әмири. Аҡ елкән. 112 — 113-сө биттәр).

Һәҙиә Дәүләтшина, уйланып йөрөй торғас, былар менән тулыһынса килешә һәм, бөтә көсөн һалып, әҫәрҙе ысын роман итеү йәһәтенән тырышып эшләй, һөҙөмтәлә хәҙер инде бөтәбеҙгә яҡшы таныш (дөрөҫ, бер аҙ схематизмдан да арынмаған) тулы ҡанлы "Ырғыҙ" романын өлгөртә. Шуныһы ла ифрат ҡыҙыҡлы: Ғәйнан Әмири тәҡдимдәре буйынса тулыландырылған "Ырғыҙ"ҙың сюжет һөлдәһе, бер үк ҡалыпҡа һалынғандай, Ғ. Әмириҙең күпкә элегерәк һәм ул «Ырғыҙ» ҡулъяҙмаһы менән таныш түгел осоронда уҡ (ул уны 1951 йылда уҡый) — 1947 йылда яҙылған "Бәхет тауы (Гөлбикә әбей һөйләгән легенда)" әҫәренекенә ғәжәйеб тап килеп тора: Әмириҙең символик "Өмөт үре" — романдағы коммунистар партияһы ул, "Дуҫтар" — романдағы урыҫ халҡы, "Бөркөт халыҡ" — романдағы башҡорт халҡы, "ике башлы аждаһа" — романдағы батша самодержавиеһы һәм уға ҡаршы баяғы халыҡтарҙың партия етәкселегендәге берҙәм көрәше... Оҡшашлыҡтың сере генә мәғлүм түгел: Һәҙиә Дәүләтшина хатта үҙе лә абайламай ҡулланғанмы был уның "Ырғыҙ"ына тиклем үк булған ҡыҙыҡлы үрнәкте, әллә легенда авторының ихлас күңелле кәңәше, йомартлығы менәнме?.. Моғайын, хаҡлыҡ һуңғыһындалыр. Әммә бөйөк әҙибә Ғәйнан Әмириҙең, Өфө, Ырымбур губерналарында булып үткән ваҡиғаларҙы ла романда бер юлы иңләргә, тигәнен ҡабул ҡылмай, "мин был өлкәләрҙә йәшәүсе башҡорттар тормошон кәүҙәләндереүҙе бурыс итеп ҡуйманым, бары Куйбышев өлкәһендә — Ырғыҙ буйҙарында йәшәүсе бик аҙ һанлы башҡорттар хаҡында ғына яҙырға теләнем", ти (бик дөрөҫ: тамсы һыуҙа ла бөтә диңгеҙҙе сағылдырып була бит!). "Күрәһегеҙ, Һәҙиә апа, мин артығыраҡ мауығып киткәнмендер, тинем мин, -- тип хәтерләй Ғ. Әмири. — Шулай ҙа Ырғыҙ буйы башҡорттары Өфө, Ырымбур яғы башҡорттары менән бөтөнләй аралашмай йәшәмәгәндәрҙер бит?" — "Юҡ, әлбиттә. Әммә, минеңсә, был аралашыу үтә тығыҙ булмаған", — тип килешә биреп тә ҡуя автор"...

Ошо урында йәнә лә ҡыҙыҡлы фактҡа төбәләйек: Һәҙиә Дәүләтшина, "үтә тығыҙ булмаған был аралашыу"ҙы шулай ҙа күрһәтеү кәрәклеген төшөнөп, шул уҡ Ғәйнан Әмириҙең әллә ҡасанғы -- 1939 йылда яҙылған "Гөлбикә" хикәйәһенең "ойотҡо"һон (моғайын, авторҙың фатихаһы менәндер) киң ҡуллана, сөнки хикәйәләге дала яҡтан Уралға күсеп килгән колоритлы Гөлбикә әбей образы — романдағы, киреһенсә, Уралдан дала яҡҡа күсеп ҡайтҡан "Урал әбейе"

---

[4] Әҫәрҙең был тәүге варианты ысынлап та шундай сикләнгәнлеккә эйә.

Шәһиҙәнең ҡойоп ҡуйған һыны ул. Хатта ваҡлыҡтарынаса тап килә: икеһе лә ун ике йәшлек кенә ҡыҙ саҡтарында тыуған ерҙәренән ситкә сығып китә, икеһе лә күргәҙмәле тере тарих һәм йырсы булып үҫә. "Гөлбикә әбей әле лә иҫән. *Ҙур легендаға оҡшаған уның ғүмере"* (Ғ.Ә.). "Урал әбейе" лә шулай уҡ "әллә ҡайҙа бер кәштәлә саң баҫып ятҡан еренән табып алып уҡылған *бер иҫке тарих һымаҡ йәшәй"* (Һ.Д.). "Бәхет тауы"ндағы символик "Аждаһа»ға ҡаршы алышыусы егет — "Ырғыҙ"ҙағы "Урал әбейе"нең батша самодержавиеһына ҡаршы көрәшсе улы Асҡар ул...

Бара-тора Ғ. Әмириҙең "Гөлбикә" хикәйәһенең икенсе бүлегендәге Гөлбикә образы йәнә "Ырғыҙ"ҙағы ҡойоп ҡуйған Гөлйөҙөмгә әйләнә (бөтә көнкүреш-ваҡиғалары менән): Гөлбикәне — бай улы Байымбәткә (Ғ.Ә.), ә Гөлйөҙөмдө Моратшабай улы Сәйетғужаға (Һ.Д.) көсләп кейәүгә бирергә йыйыналар. Байымбәттең "ҡартлығы арҡаһында аҡылына ла еңеллек килә башлаған" (Ғ.Ә.) булһа, Сәйетғужа ла шулай уҡ "ҡылый күҙле тинтәк", тиле-миле (Һ.Д.)... Байымбәт Гөлбикәне дүртенсе ҡатынлыҡҡа алһа (Ғ.Ә.), "буласаҡ ир Сәйетғужаның әле Гөлйөҙөмдөң өҫтөнән тағы өс ҡатын алырға ирекле икәне тураһында һөйләйҙәр ине" (Һ.Д.)...

Бына ҡалым хаҡында килешәләр: "ун биш йылҡы, утыҙ баш ҡуйға күнербеҙ. Туй килем-китемдәре өсөн йөҙ һум аҡса ла өҫтәрһегеҙ" (Ғ.Ә.). "Бер һарыҡ, йөҙ ҡырҡ һум мәһәр, туйға бер тыу бейә, ҡалымына ла бер һимеҙ йылҡы малы, ҡайныма бер сапан, ҡәйнемә инә туны, һиңә бер ҡат яҡшы кейем" (Һ.Д.). Әмири Гөлбикәһе, ҡыҙ сафлығын һаҡлаған килеш, ирен сәнсеп ҡаса. Дәүләтшина Гөлйөҙөмө лә ҡыҙ сафлығын юймаҫы борон никах мәжлесенән ҡаса... Роман авторы ана шулай Ырғыҙ менән Урал араһындағы талап ителгән бәйләнеште, тимәк, Ғ. Әмириҙән "үтескә алынған" "Урал әбейе" образы аша булдыра, был иһә әҫәр ваҡиғалары даирәһен ысынлап та шаҡтай киңәйтә төшә. Шулай итеп, Ғәйнан Әмириҙең йомарт күңелле булышлығы арҡаһында «Ырғыҙ» романы һуңғы эшләнешендә шаҡтай киңәйеп, тәрәнәйеп һәм тулыланып, хәҙерге мәшһүрлегенә ирешә; уның күп кәртәләр үтеп донъяға сығыуында — ниһәйәт, уҡыусылар ҡулына килеп етеүендә лә Ғәйнан Әмириҙең игелеге һанап бөтөргөһөҙ ҙур һәм хәл иткес булды, быны хатта уның яһил дошмандары ла һис кире ҡаға алмай.

"Ырғыҙ" романы, үкенескә ҡаршы, авторы вафат булғандан һуң ғына донъяға сыға һәм бының өсөн Ғәйнан Әмириҙән дә нығыраҡ әрнеүсе лә, ғорурланыусы ла булмағандыр ҡәләмдәштәр араһында:

*Урал тауҙарының буйында*
*Оҙон-оҙон быуат буйына,*
*Буйһонмайса яуыз яҙмышҡа,*
*Яғалашҡан, ҡыйыу алышҡан*
*Башҡорт ҡыҙҙарын мин йырларға*
*Ҡәләм алды ниһәм ҡулдарға,*
*Һин, Һәҙиә, алға баҫаһың,*
*Һиңә мәҙех килә яҙаһым.*

*Башҡорт ҡыҙы әсе сеңләгән,*
*Тик һис кемгә башын эймәгән.*
*Йөҙө пәрәнжә лә кеймәгән.*
*Ир-егеттәй һыбай менгән ул,*
*Илен һаҡлап, яуға елгән ул,*
*Үлем күҙенә бағып көлгән ул! —*
*О Һәҙиә, һинең һының был,*
*Замандашым, йәсе, йырым бул!*

*Башҡорт ҡыҙы ярһыу йөрәкле,*
*Һүрелмәçтәй ҡайнар теләкле;*
*Йырҙан таша уның күңеле,*
*Шоңҡар ҡыйыламы — бейеүе!*
*Мөхәббәте уның — ут көйөк,*
*Ә нәфрәте — сатнар боҙ кеүек.*
*Үҙе дәртле, үҙе бик түҙем. —*
*Һәҙиәкәй, был бит һин үҙең!*
*Ғәрәп һүҙе булған "Һәҙиә"*
*"Бүләк" тигән һүҙҙер беҙҙеңсә.*
*Башҡорт, теләп һиңә ҙур теләк,*
*Биреп һиңә ҡайнар ҡуш йөрәк,*
*Бүләк итте һине донъяға,*
*Даның сиктәр аша тарала.*
*Йөҙөк ҡашы булдың халҡыңдың,*
*Күңелеңдә уның ялҡыны.*

*Йәмле, шаулы Ырғыҙ буйҙарын,*
*Ырғыҙ буйҙарының ҡыҙҙарын,*
*Тас та арыçландай улдарын,*
*Һәҙиә, һин данлап йырланың.*
*Ғашиҡ инең беҙҙең заманға,*
*Йырың тынмай һаман, һаман да.*
*Юҡ, Һәҙиә, һүҙең тутыҡмаç,*
*Илең һине ғүмер онотмаç.*

Романға баш һүҙ яҙыуҙы ла Ғәйнан ағайға тапшыралар, ләкин, Сталин репрессиялары йылдарында "халыҡ дошманы" рәүешендә билдәһеҙлеккә һөрөлгән, шунан һуң да, күпме генә йөрәкһеп талпынһа ла, Яҙыусылар берлегенә ҡабат ағза итеп алынмаған, шул арҡала вафатынан һуң да ижад мираçын йыйнап алып өйрәнеү, һаҡлау өсөн рәсми органдар тарафынан бер сара ла күрелмәгән тынсыу осраҡта тота һалып ундай етди темаға мәҡәлә яҙыу һис тә мөмкин булмаған эш ине, иң элек уның, әҙибәнең, ҡағыҙҙарына күҙ һалыу кәрәк ине. Был саҡта "Әҙәби Башҡортостан" журналы баш мөхәрриренең урынбаçары булып эшләгән уҙаманыбыҙ мәрхүмәнең Бөрө ҡалаһындағы әсәһе Гөлйәүһәр инәйгә

бара, киндер тоҡҡа тултырылып карауат аҫтында аунап ятмыш ҡулъяҙмаларҙы Өфөгә алып ҡайта. (Әйткәндәй, Ғәйнан ағай үҙенең тар ғына бүлмәһендә янына ингән һәр берәүгә, күңеле тулыуҙан ике күҙе йәшкәҙеп, Һ. Дәүләтшинаның ҡаҙ тешендәй ваҡ ҡына ғәрәп хәрефтәрен теҙеп яҙылған дәфтәрҙәрен асып күрһәтер ине, — хәҙер улар барыһы ла Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми архивы фондында). Шуларға таянып, Һ. Дәүләтшинаның “Ырғыҙ” романының ике баҫмаһына, “Айбикә” китабына баш һүҙҙәр һәм “Аҡ елкән”гә “Башҡорт гүзәле” тигән гүзәл иҫтәлеген яҙа, тап ошо Әмири фекерҙәре унан һуңғы башҡаларға ла әлегәсә бөйөк әҙибә хаҡындағы хеҙмәттәрендә яҡшы нигеҙ булып тора (береһе лә Ғәйнан Әмириҙән уҙып яңы һүҙ әйтә алғаны юҡ). Архивта иһә Һ. Дәүләтшина ҡағыҙҙарының тулы исемлеге һәм уларҙы Ғәйнан Әмириҙән ***тулыһынса ҡабул ҡылып алыу*** тураһында рәсми комиссия ағзалары, шул иҫәптән Гөлйәүһәр инәй үҙе лә, ҡул ҡуйған акт, өҫтәүенә, яҙыусы Ғ. Әмири тарафынан Һ. Дәүләтшина материалдарының ***тулыһынса тапшырылыуы*** тураһында әҙибәнең вариҫы (мираҫсыһы) булған шул уҡ Ильясова Гөлйәүһәр инәйҙең ғәрәп хәрефтәре менән үҙ ҡулынан яҙып биргәне лә бар. Тимәк, бөйөк әҙибәнең архивын килер быуындар өсөн һаҡлап алып ҡалыуҙа ла Ғәйнан ағай Әмириҙең хеҙмәте ҙур, әммә быны өсөн рәхмәт урынына ҡара яла яғыусылар табылды — “ит изгелек — көт яуызлыҡ” тигәндәре ошолор...

ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты әҙәбиәт һәм сәнғәт секторы мөдире Рәжәп Хәйруллин иптәш 1950 йылда яҙыусыларҙың һуңғы ике йыл дауамындағы эше тураһында ВКП(б) Үҙәк Комитеты вәкиле Новиковҡа биргән хисапнамәлә: “Ғ. Әмири совет кешеләренең Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында һәм тылда күрһәткән ҡаһарманлыҡтары тураһындағы “Ватандаштар” повесе өҫтөндә эшләй” тип әйтелә. Шуныһы ҡыҙыҡ: Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе Мостай Кәрим 1954 йылдың 26 июнендә КПСС өлкә комитеты сәркәтибе Саяповҡа яҙған белешмәһендә Ғәли Ибраһимов “Ватандаштар” тигән романын тамамлай, тип хәбәр итә. Күренеүенсә, ике ҡәләмдәш, үҙҙәре лә белмәйенсәлер, моғайын, әҫәрҙәренә бер үк исем алғандар... Был хәл һуңынан уларға мәғлүм булғандыр, сөнки исемдән икеһе тиң ваз кисеп, Ғ. Ибраһимов әҫәре 1956 йылда “Бер полк кешеләре” тип нәшер ителә, ә Ғ. Әмириҙеке иһә 1960 йылда “Әҙәби Башҡортостан” журналында бөтәбеҙгә мәғлүм “Мораҙым” булып сыға. Һ. Дәүләтшинаның шунан өс йыл элек кенә дан ҡаҙанған “Ырғыҙ” романынан һуң ошондай уҡ тулы ҡанлы яңы әҫәрҙәргә сарсап йәшәүсе әҙәбиәт һөйөүселәр араһында “Мораҙым” шундайын да ныҡ күтәреп алынып, яратып уҡыла ки, редакцияларға өҙлөкһөҙ хаттар яуа, уҡыусылар конференцияларында телдән төшөрмәй маҡтала (ҡарағыҙ: “Мораҙым” повесе хаҡында китап уҡыусылар фекере. “Ағиҙел”, 1961/3). Әммә ҡыуаныс менән көйөнөс йәнәшә йөрөй икән: билдәле сәбәптәр арҡаһында авторҙың ҙур уңышына “эстәре көтөрҙәгән” ҡайһы бер ҡәләмдәштәре (ни хәл итәһең, ундайҙар ҙа булып тора — улар ҙа бәндәләр бит!) быны күпһенеп, шик аҫтына алып: “Эт һейгән арала яҙҙы — быны былай булыуы мөмкин түгел!” (үҙенең “Нигеҙ” романы юғары баһаланмауҙан рәнйеп йөрөгән әҙип С.А.), йәки: “Үҙенеке түгелдер ул...” (повесе кире ҡағылған әҙибә З.Б.) тип һөйләнеп йөрөнөләр, ә был уңышҡа авторҙың бөтә ижади ғүмере

буйына тап шундай уҡ темаларға һәм юғары художестволы кимәлдә яҙылған сәсмә әҫәрҙәре аша бик тәбиғи килеүен, повесте яҙа башлауына ла инде аҙ түгел — теүәл ун йыл уҙыуын уйлап та торманылар.

Йән дуҫы Ғәлимов Сәләм донъянан киткәндән һуң Ғәйнан Әмириҙең: "Йөрәк итем, йәнем, дуҫым, Сәләм..." тип әрнеп өҙгөләнеүҙәрен, ғүмере буйына унын ялҡынлы ижадын, бигерәк тә атаҡлы "Шоңҡар" поэмаһын күңелендә һүрелтмәй һаҡлап йөрөтөүен беләбеҙ (шағир хаҡындағы иҫтәлеген дә "Шоңҡар" тип исемләне, "ат өҫтөндә шоңҡарҙай осоусы халыҡ" тигән һүҙҙәрҙе йыш ҡулланды).

Бының менән мин, Ғ. Сәләмдең үҙе кеүек үк, "Шоңҡар" поэмаһы ла Ғ. Әмири күңеленә тәрән тамыр йәйеүен, атаҡлы повесен яҙғанда ла ныҡ тәьҫир итеүен баҫымсаҡларға теләйем. Сәләм үҙе "Шоңҡар"ының темаһын һәм аһәңен күпмелер дәрәжәлә Булат Ишемғоловтың "Ҡараҡлыҡ" поэмаһынан алғанлығын йәшермәгән; үҙ сиратында Ғ. Әмири "Мораҙым"ының темаһы һәм сюжеты ла Сәләмдекенә иш килә, хатта икеһе бер ҡалыптан, тип әйтерлек, әммә улар һәр ҡайһыһы бер үк теманы ике төрлө һәм үҙенсә балҡытҡан (ижадтағы быңдай хәлдәрҙең тәбиғилеге билдәле). Яңылыш юлдан барһаҡ, Ғ. Әмириҙең "Салауат аманаты»нан һуң яҙған З. Биишеваның "Салауат монологы»н да, йомшаҡ ҡына әйткәндә, Ғ. Әмириҙе ҡабатлау тип, М. Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме" повесен — З. Биишеваның "Гөльямал" шиғри повесенән (әйткәндәй, унда "Өйҙөң йәме" тигән бүлек тә бар!) алынған, тип баһалап булыр ине... Зирәк уҡыусы шуға ла иғтибар итә: "Мораҙым" повесенең сюжет-йөкмәткеһендәге бөтә аһәңен, ваҡиғаларының нигеҙен төньяҡ Башҡортостанда тыуып үҫкән Ғ. Әмириҙең 1939 йылдың йәмле йәйендә мөһәбәт-сал Урал тауҙарына ғилми сәйәхәтендә тәрән хисләнеп кисерелгән, "Атлы халыҡ" әҫәрендә маһир тасуирланған онотолмаҫ сағыу тәьҫораттары тәшкил итә.

Урал тәбиғәтенең ошо һәм 1947 йылда яҙылған "Ҡояшлы йыр" хикәйәһендәге тап ошондай уҡ тасуирнамәһе тулы килеш "Мораҙым»ға барып кергән; икеһендәге лә *"бик боронго крепостәрҙең харабаларына оҡшап ултырған ҡаялар"* ҙа шул көйөнсә күсерелгән. "Мораҙым"дың 18-се битендә башҡорт халҡы тураһындағы: *"Атҡа менһә, ул ҡош булып осҡан,* ат өҫтөндә сабып барышлай, һауала осҡан ҡарсығаны атып төшөргән", — тигән, йәки 154-се биттәге "Башҡорттар, ат менеп, шоңҡар булып осҡандар", кеүек һөкләныуын да шул уҡ 1939 йылғы "Атлы халыҡ"та күрәбеҙ: "Эйе, башҡорт халҡы атты һөйә, данлыҡлы толпарҙар үҫтерә белә һәм шул *толпарҙар өҫтөндә ыласын ҡоштай оса белә".*

Авторҙың шундағы һәм 1947 йылда яҙылған "Йыр" хикәйәһендәге башҡорт халыҡ йырҙарына сикһеҙ һөкланыуы ла тап шул көйөнсә, тип әйтерлек, "Мораҙым"дың 69-сы битендә һ.б. урындарҙа ҡабатлана. Йәғни ҙә нәҡ бына ошо, үҙенең элекке хикәйәләрендә һәм очерктарында йырланған иҫ киткес хозур тәбиғәт ҡосағында, батыр кешеләр араһында тыуып үҫә, йәшәй ҙә инде "Мораҙым"дың төп геройы Мораҙым! 1947 йылғы "Бәхет тауы" хикәйәһендәге

“бөркөт халыҡ”тан алынып, уның тыуған ауылы ла “Бөркөт”, ә халҡы иһә “бөркөтләләр[5]” тип исемләнә бит!

Автор Уралға сәйәхәтендә тыңлаған һәм яҙып алған легендалар араһында, баяғыса, ҡоштай осоусы толпарҙар, уларҙы урлаусы атаҡлы ат ҡараҡтары тураһындағылары ла байтаҡ ине, әлбиттә. Яҙыусы үҙе Мораҙым һәм уның “остаз”ы — һөрһөгән ат ҡарағы Иркәбай образдарының тере прототиптарын тап шунда, Уралға сәйәхәтендә, осратыуын, ат урлауҙың үтә нескә серҙәрен иһә үҙенең тап шул яҡтарҙа тыуып үҫкән дуҫы шағир Батыр Вәлидтән ишетеп белеүен һәм файҙаланыуын (Аҡ елкән. 256 — 257-се биттәр) кинәнеп һөйләй торғайны. Ғәйнан Әмири хикәйәләрендәге (“Беренсе һикереү”, “Бер өйҙөң кешеләре”, “Һуңғы таж япрағы”) егеттәре гел “һары сәсле, зәңгәр күҙле”, күбеһенсә урыҫ милләтле ҡыҙҙарға ғашиҡ булһалар, Мораҙымдың һөйгәне Лидия Расцветаева ла шундай уҡ. Хатта ваҡ ҡына деталдәр ҙә уның әүәлге әҫәрҙәренән килә: “Ҙур баҡса”лағы (1947), ҙур баҡса үҫтереп тә, варенье ҡайната белмәү — “Мораҙым”дың 70-се битендә ҡабатлана, ә «ғәскәровтар ғаиләһе»ндәге (1956) “аҡ самауыр сәйенән” (араҡы) ауыҙ итеү — “Мораҙым”дың 157-се битендә урын ала...

Быларҙан тыш, повескә авторҙың фольклорсы булараҡ индергән өлөштәре лә байтаҡ: бөрйән риүәйәттәре (30-сы бит), башҡорт халыҡ йырҙары тураһында уйланыу (69, 127-се биттәр); шулай уҡ автор-публицист сәхифәләре: әсәлек миссияһы, изге әсәләр тураһында уйланыуҙар (214 — 216-сы биттәр), башҡорт атлыларының Рәсәй тарихындағы яу батырлыҡтары (153 — 154-се биттәр) һ.б.

Һ. Дәүләтшинаның йәшәү дәүерендә булмаған, тап “Мораҙым” повесе яҙылыу осорондағы автор үҙе үк эсендә ҡайнап йәшәгән билдәле факттар, замана үҙе тыуҙырған яңы һүҙҙәр (неологизмдар) һ.б. йыш осрай. Мәҫәлән, повесть геройы «Мораҙым»дыҡынан һуңғыраҡ осорға ҡараған, әммә әҫәрҙең яҙылыу осорона тап килгән армияға алғанда “ҡараусыһы булмаған яңғыҙ әсәләрҙең улдарына льгота биреү тураһындағы закон” (80-се бит), “мильтон” (милиционер), “еүеш эш” (үлтереү), “бейеүселәр ансамбле”, “хореографик композиция”, “һауынсы”, “капут” (немецса), “кәкүк” (1939 йыл фин һуғышындағы “кукушка” — ағас башына ҡунаҡлаған снайпер)... Мәшһүр хореограф Фәйзи Ғәскәровтың шанлы бейеү ансамбленең һәм ул сәхнәгә ҡуйған бейеүҙәрҙең уларға тиклемге повесть геройы Мораҙымға “йәбештерелеүен” дә күрәбеҙ: “бөркөттәр бейеүе” (81-се бит), “Ете ҡыҙ” бейеүен хәтерләткән “ете ҡыҙ менән ете егет” (83-сө бит); “бөркөттәрҙең осорға өйрәнеүе” тигән хореографик композиция ла (95-се бит) Ф. Ғәскәров либреттоһына ҡуйылған “Сыңрау торна” балетын һ.б. хәтерләтә. Һәм йәнә Ғ. Әмири, ҡайһы берҙә урыҫса уйлап яҙыу шауҡымылыр инде, урыҫтың “орел” (ата бөркөт), “орлица” (инә бөркөт), “орленок” (балапан — бөркөт балаһы) тигән һүҙҙәрен күҙ уңында тотоп, буғай, “бөркөт” тип кенә әйтәһе урында, Мораҙымын ҡолаҡты ярғыс “ата бөркөт” рәүешендә бейетә (Һәҙиә Дәүләтшина һис тә былай эшләмәҫ ине)... Композитор Мәсәлим Вәлиевтың һуғыштан һуңғы заманала (Ғ. Әмириҙең “Мораҙым”ды яҙыу осоронда) киң билдәле булған “Умырзая” йырының тексын, сәсмәүерләндереп, повескә индереп

[5] Тап Ғ. Әмириҙең Ғәйнә һөйләшенсә. Ә көньяҡ һөйләштә ул “бөркөттәр” булыр ине.

ебәреү осрағы ла бар: “Умырзая ла барлыҡ гөлдәрҙән элек, ҡар ҡатламын ярып сығып, сәскә ата, ләкин үҙе яҙ Ҡояшының сыуаҡ һәм йомарт нурҙары аҫтында ҡаушап-юғалып ҡалғандай, уның йөҙөнә тура баға алмай, бәбәктәрен түбән эйә” (82-се бит). Шул йылдарҙа институттың фольклор бүлегендә Ғәйнан Әмири менән бергә эшләгән Нәҡи Исәнбәт тә хас үҙе көйөнсә әҫәргә инеп киткән: “Бер ауылға барып сыҡһам, унда башына кейеҙ эшләпә, ялан аяғына сабата кейеп алған, ҡап-ҡара түңәрәк һаҡаллы, бик сибәр бер кешегә тап булдым; арҡаһына тоҡсай аҫҡан, ҡулына дәфтәр менән ҡәләм тотоп алған. Ҡойоп ҡуйған мосафир, йәки народник инде! Танышып, һөйләшеп киттек. Баҡһам, был татар яҙыусыһы Нәҡи Исәнбәт булып сыҡты. Ул икенсе йәй инде шулай, ауылдан ауылға йәйәү йөрөп, ҡарттарҙан һорашып, **башҡорт** (мин һыҙыҡ өҫтөнә алдым. — *Й.С.*) әкиәттәрен, йырҙарын, мәҡәлдәрен яҙып алыу, башҡорт халыҡ теле диалекттарын өйрәнеү менән шөғөлләнә икән... Хәтеремдә, яҙыусы үҙенең шаҡтай ҡабарынҡы тоҡсайына күрһәтте лә: “Беләһегеҙме, бында күпме байлыҡ ята? — тине. — **башҡорт** күңелендә быуаттар буйына йыйналған ынйы-мәрйендәр, алтын-көмөштәр улар!” (“Мораҙым”, 185-се бит).

Ғәйнан Әмири бөтәһен ылғый тормоштан һоҫоуы хаҡында үҙе лә яҙғылаһы, мәҫәлән, “Ҙур баҡса”һы геройының прототибы итеп — ауылдаштарынан Нуримөхәммәт ағайҙы, “Мораҙым”дағы Ғәлимулла Дәүләтшин образының прототибы итеп Ғәлимулла ағай Долғаршинды алыуы, ә уның ҡыҙы Зөбәйҙә иһә повескә хатта исемен дә үҙгәртмәй кереп китеүе тураһында (Аҡ елкән. 365, 372-се биттәр). Адвокат Әмирхановты ла ул үҙ фамилияһы менән үк тормоштоң үҙенән һурған — һуғыштан һуңғы осорҙа был зыялы татар кешеһе беҙҙең районда ла прокурор булып эшләп киткәйне. Уға ҡалһа, Мораҙым һәм Лидия Расцветаева образдары, шулай уҡ уларға тығыҙ бәйле, повесте повесть иткән көсөргәнешле ваҡиғалар үҙҙәре үк шау тормоштан — ғүмеренең һуңғы йылдарында Өфөлә йәшәүсе халыҡ судьяһы Шацкая Валентина Антоновнаның эш тәжрибәһенән алынған, унда авторҙың замандаш һәм ҡәләмдәштәренең фамилияларын йөрөткән Юлтыев, Кулибаев, Кусимов, Дәүләтшина кеүектәр ҙә бар...

Билдәле булыуынса, теләгән бер яҙыусының һүҙ байлығының нигеҙендә уның тыуып үҫкән үҙ ауылының, ырыуының, төбәгенең һөйләше, мәҡәл һәм әйтемдәре “алтын фонд” тәшкил итә; әҙип йыш ҡына, теләйме-теләмәйме, әҫәрҙәрен яҙғанда беренсе сиратта, хатта үҙе лә һиҙмәҫтән, бала сағынан үҙләштерелгән шул байлыҡты шул көйөнсә ҡағыҙ битенә төшөрә лә ебәрә. Быны беҙ Һәҙиә Дәүләтшина текстарындағы Ырғыҙ буйы үҫәргән-бөрйән һөйләшенә генә хас айырым һүҙҙәр рәүешендә лә күрәбеҙ, һәм шулай уҡ башҡорт әҙәби телен гәрсә яҡшы итеп үҙләштергән Ғәйнан Әмири “Мораҙым”ында ла телдәре ярым татарлашҡан Ғәйнә башҡорттары һөйләшенең үҙенсәлекле “боҙоҡ” һүҙҙәре, мәҡәлдәре сифатында автор тексында ла, персонаждар телмәрендә лә һибелеп ятыуын шәйләйбеҙ. Бына шуға миҫалдар (тәүҙә — Ғ. Әмири һүҙе, ә һыҙыҡ аша икенсе урында — шул уҡ һүҙҙең әҙәби тел үрнәге, йәйәләр эсендә шул уҡ һүҙҙең Һ. Дәүләтшинала осраған әйтелеше килтерелә):

*дертләп — тертләп (тертләп); баҫынҡы — баҫалҡы; сибәрлеге (ҡатын-ҡыҙға ҡарата) — һылыулығы; соҡондолар — соҡсондолар (соҡсондолар); алты баҫмалы тальян*

*— алты телле тальян; конюх — ат ҡараусы (көтөүсе); бәртәкә — ? — (?); тоҙаҡлап (сабып барған атты) — ҡороҡлап (ҡороҡлап); үкәлде — һөйкәлде (һөйкәлде); әйбәт — һәйбәт; кипшек ҡар — ҡырпаҡ ҡар (ҡырпаҡ ҡар); икмәк силәге — ашлау (ҡоштабаҡ); саңғы аҫты — саңғы табаны; итәгеңде -- сабыуыңды — итәк-салғыйыңды; мамыҡ шәл — дебет шәл; һыу ҡыҙы — һыуһылыу; ыҡтымат — ыҡсым; ҡорт иле — ҡорт күсе; нәләтләнгән — ләғнәтләнгән; имеҙлеге (ҡатын-ҡыҙ имсәгенең) — имсәк башы, бәбәге; ҡабилиәтле (Ғ. Әмириҙең яратҡан һүҙе); йомшаҡ күңеллелек — миһырбанлылыҡ; үткен — үткер (үткер); мүкәйләп — имгәкләп (имгәкләп); еүеш тауыҡ — күшеккән тауыҡ (күшеккән тауыҡ); мунса төшөп — мунса инеп (мунса инеп); арт аяҡтарына үрә баҫтылар (аттар) — ҡарғынылар; бүрене күпме генә ашатһаң да урманға ҡарай — бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай; кикереге төшөр — кикереге шиңер; ҡойроғоңдо һабынларға — ҡойроғоңдо тоттортмаҫҡа; тәңкәһен һыуға төшөрөп ебәргән ҡыҙ шикелле (ир-атҡа ҡарата) — балтаһы һыуға батҡандай; "татарҙа бер һүҙ бар: тилене тиле диған саен тигәнәк буе сикерә" (үҙҙәрендә йөрөгән мәҡәл); киҫеп ҡаплаған кеүек — һуйған да ҡаплаған; үҙең баш, үҙең ҡуш — үҙең баш, үҙең түш (үҙең баш, үҙең түш)...*

Күренеүенсә, "Мораҙым»ға Ғәйнан Әмириҙең фәҡәт үҙенең генә шуға тиклемге барлыҡ тормош, эш, ижад тәжрибәһе һәм тел үҙенсәлеге (уңышлыһы ла, уңышһыҙы ла) һалынған, уны башҡа авторҙарҙың (бигерәк тә Һ. Дәүләтшинаның!) әҫәрҙәре менән бутау һис кенә лә мөмкин түгел. Унын текстарының һәр һөйләме, абзацы йырлап тора, әлбиттә, ләкин был һис тә бөйөк Һәҙиә Дәүләтшина йыры түгел, ә Ғәйнан Әмири йыры. Шундай айырма күҙгә ташлана тороп та, баяғы әйткәнемдәй, "Мораҙым" авторының хатта һыуынып өлгөрмәгән ҡәбере өҫтөнә нахаҡ бәлә өйөүселәр ҡарпыны, ҡайһы бер яһил һәм яуапһыҙҙар ҡыҫырыҡта ҡыҫыр ҡойон уйнатып, ялаларын ҡуйыртты ла ҡуйыртты. Мәрхүмдең бөтә тормош юлын, ижадын, намыҫлылығын яҡшы белгән замандаштарына был ғиллә шомло борсоу һалды. Өҫтә телгә алынған мәҡәләһендә оло шағирыбыҙ Яҡуп Ҡолмой, "Мораҙым" хаҡында уйланып, бөтә республика йәмәғәтселегенә ишеттереп әрнене: "Шуны ла әйтергә кәрәк, һуңғы осорҙа был әҫәрҙең авторы хаҡында бик буталсыҡ уйҙырма йөрөй. Уҡыусылар араһында шундай шикле, асыҡланмаған һүҙҙәр таратыуҙы сикләргә ваҡыттыр инде". Һәм йәнә:

"03.05.1989.

1937 йылда тик тереләр өҫтөнән генә донос яҙалар ине. Хәҙер, илгә фашлап, мәрхүмдәр өҫтөнән ялған донос яҙалар. Мәрхүм Ғәйнан Әмири ана шул хәлгә дусар ителде. "Мораҙым"ды Дәүләтшинанан урлаған, тип ғәйепләйҙәр. Дәүләтшинаның ундай ҡулъяҙмаһы юҡ ине. Быны мин бик яҡшы беләм.

Ә. Вәли журналда (ул саҡтағы "Әҙәби Башҡортостан", бөгөнгө "Ағиҙел" – Й.С.) "Ырғыҙ"ҙан өҙөктәр баҫтырырға баш тартҡас, мин Һәҙиәнән һораным: "Юҡмы берәй бәләкәйерәк әҫәрең? Бир, шуны баҫтырайыҡ", -- тинем. "Юҡ шул. Бар яҙғаным ошо "Ырғыҙ", -- тине.

(Мостай Кәрим. Көндәлектәр. "Ағиҙел" №11, 2006 йыл, 75-енсе бит).

1956 йылда З. Биишева "Кәмһетелгәндәр" романының беренсе вариантын баш мөхәррир урынбаҫары булып Ғ. Әмири эшләгән "Әҙәби Башҡортостан"

журналына килтерә; редколлегия ағзалары (бигерәк тә Баязит Бикбай) уҡығандан һуң әҫәр, өлгөрөп етмәгән тип, авторына эшләргә кире ҡайтарыла (был йәһәттән редколлегия ағзаһы Б. Бикбайҙың абруйлы һүҙе ҙур урын тота), ләкин нәфрәтләнгән автор быны фәҡәт Ғәйнан Әмириҙең этлеге итеп һанай, ошо фекерен Әмириҙе дуҫ күрмәүсе ҡәләмдәше С. Агиш менән уртаҡлаша һәм унан теләктәшлек таба, сөнки тап Ғәйнан Әмири партия өлкә комитетының әҙәбиәт һәм сәнғәт секторын етәкләгән осорҙа С. Агиштың «Нигеҙ" романы әҙәбиәтсе йәмәғәтселек тарафынан уңышһыҙ тип баһаланғайны (хаҡ баһа!), өҫтәүенә, "Үктәбер" журналының сифат-күрке түбән төшөү арҡаһында, уның яуаплы редакторы С. Агиш вазифаһынан бушатылғайны. Ошондай ғәмдәр ҡыҫымында ғазапланмыш был икәүгә 1960 йылда "Әҙәби Башҡортостан" һандарында Ғ. Әмириҙең "Мораҙым" повесенең күкрәп килеп сығыуы, уҡыусылары тарафынан да, тәнҡитселәр күҙенән дә йылы ҡаршыланыуы көтөлмәгән һәм теләнмәгән хәл була, асыуҙарын ҡабарта, шомло шиккә төшөрә. Һәҙиә Дәүләтшина тере сағында, етәксе ҡәләмдәштәре даирәһендә асып керер ишек таба алмай ҡулъяҙмаларын күтәреп интегеп йөрөгәнендә уның барлығын белергә лә теләмәгән (Сәғит ағай Агиш хатта "Ырғыҙ" романына күпмелер аяҡ та салған), вафат булғас та шулай уҡ ҡулъяҙмаларын йыйып алыу, һаҡлап ҡалыу йәһәтенән ҡыл да ҡымшатмаған хөрмәтле әҙибә һәм әҙибебеҙ, ни өсөндөр, көтмәгәндә, мәрхүмәнең архивының яҙмышын ҡайғырта башлайҙар һәм намыҫлы әҙип Ғәйнан Әмириҙең өҫтөнә үҙҙәре уйлап сығарған һәр төрлө яла, бысраҡ өйөргә керешәләр. Һөҙөмтәлә Ғ. Әмириҙең "Мораҙым"ы — Һ. Дәүләтшинаның урланған "Ат ҡарағы" тигән әҫәре икән ул, тигән ялалы имеш-мимеш таратыла түҙеп торғоһоҙ тынсыу әҙәби мөхиттә. Яҙыусылар берлеге идараһында (рәйесе Мостай Кәрим) был шик-шөбһәнең нигеҙһеҙлеген, Ғ. Әмириҙең повесть яҙа башлауы тураһында бынан ун йыл элгәре үк рәсми хәбәр ителеүен иҫтәренә төшөрөп, кире ҡаҡһалар ҙа, тегеләр төңөлмәйҙәр һәм нахаҡ ғәйбәт оҙаҡ йылдарға һуҙылған һәм Ғ. Әмириҙең ҡанын ағыулаған бәләгә әүерелә. Шулай ҙа яугир әҙип, рухи яҡтан һис кенә лә бирешмәй, шиғриәт һәм проза өлкәһендә бер юлы ырамлы эшләй: 1965 йылда — "Ғашиҡтар", 1971 йылда — "Аҡ елкән", 1976 йылда "Толпарҙар", 1981 йылда "Август йондоҙҙары" тигән китаптары күкрәп донъя күрә. Хәким Ғиләжев етәкләгән Яҙыусылар берлегенең киңәйтелгән ултырышы 1971 йылда шағирҙы мәшһүр "Салауат аманаты" поэмаһы өсөн шул йылдағы Салауат Юлаев исемендәге дәүләт бүләгенә кандидат итеп күрһәтә, ләкин бүләк бирелмәй...

Йөрәге ярылып үлгән әҙиптең яҡты исеме өҫтөндә ҡара ғәйбәт ҡойоно ҡабат ҡоторона — шуларға алданған һәм үҙ ҡылыҡтары өсөн яуаплылыҡ тоймаған бер килке бәндәләр ул ҡойондо 1988 йылда Башҡортостандың Юғары хөкөм залына илтеп керетәләр (күренекле әҙиптәребеҙ Х. Ғиләжев, Н. Нәжми, И. Абдуллин унда мәрхүмдең намыҫлы исемен яҡлап сыға), ғәҙел хөкөм иһә ҡойонсолар дәғүәһен нигеҙһеҙ тип таба ла башкөллләй кире ҡаға. Шуға ла ҡарамаҫтан, башта уҡ әйтелеүенсә, мәшһүр әҙип Ғәйнан Әмириҙең ижады һәм исеме хаҡһыҙ рәүештә һәм күрәләтә онотолоуға дусар ҡылына, сөнки ҡойон уйнатыусылар Яҙыусылар берлегендә күпмелер вазифа биләп, әлегәсә баяғы ҡылған гонаһтары өсөн үкенгәндәре, мәрхүмдең яҡындары һәм йәмәғәтселек

ҡаршыһында ғәфү үтенгәндәре юҡ (ҡайһы берҙәре шул гонаһлы көйө мәрхүм дә булды инде), Яҙыусылар берлеге идараһы ла, башын ҡомға тыҡҡан баяғы дөйәғоштай, өндәшмәйенсә ҡалды...

Сталинград алыштарының ҡатнашсыһы булған татар яҙыусыһы Абдулла Әхмәт һуғыштан һуң ошолай хәтерләне:

"Ҡала яна. Әйтергә яраһа, Волга ла ут эсендә. Арғы ярҙан катерҙар, баржалар ҡорал, техника, һалдаттар сығара. Дошман йылғаны ла, Волга ярын да ҡотороп утҡа тота. Ана шул йәһәннәм ваҡытында йәш, зифа буйлы сибәр офицер сабый баланы күкрәгенә ҡыҫып, арылы-биреле сәбәләнеп йөрөй, ҡотҡарған сабыйын биреп ебәрергә арғы ярға сығыусы карапты эҙләй. Был офицер — күренекле башҡорт әҙибе капитан Ғәйнан Әмири була".

"Эйе, Ғәйнан аға ифрат кеселекле, кешелекле шәхес ине, — тип өҫтәй быға үҙебеҙҙең өлкән ҡәләмдәшебеҙ Ибраһим ағай Абдуллин. — Ул күп кенә шағирҙарға аҡ юл теләп, фатиха бирҙе. Тик үҙе үлгәс ҡара эсле кешеләр уға бысраҡ яғырға тырышты, әммә алтын саф булһа, уға бер бысраҡ та йәбешмәй. Был осраҡта ла шулай булды" ("Ағиҙел", 1997/4, 18-се бит).

...Германияның баш ҡалаһы Берлиндың атаҡлы Трептов-паркында фашизмды еңгән совет һалдатына мөһәбәт һәйкәл ҡуйылған: бер ҡулындағы булат ҡылысын фашист әүернәһенә үлемесле сабып, икенсе ҡулында көнгә табан талпыныусы сабый баланы ҡосаҡлап тотоп, йәшәйешебеҙгә мәңге ғашиҡ уҙаман баҫып тора. Уның яҡты һынында мин бөтәбеҙгә мәңге-мәңге ғашиҡ булып йәшәгән мәшһүр шағир Ғәйнан ағай Әмириҙе лә күрәм.

06.03.2017.

## Неизвестные страницы биографии писателя Али Карная в документах.

**Привожу без комментариев.**

### 1. *Личная* карточка члена Союза Советских Писателей СССР

(Анкета заполнена самим писателем).

1. Карнай Али Магометович.
2. 1904 г.р., БАССР, Мишкинский район д. Большие Шады.
3. Национальность башкир.
4. Социальное положение служащий.
5. Происхождение крестьян-бедняк.
6. Семейное положение женат.
7. Беспартийный.
8. Образование неоконченное высшее.

9. Знание языков русский, татарский, башкирский.

10. Литературный стаж с 1928 г.

11. Был до ССП в Ассоциации пролетарских писателей.

12. В Красной Армии не был.

13. Место работы Башкирское Государственное издательство.

Личный адрес: ул. Ленина, 23, кв. 1, Уфа.

**А. Карнай**. 11. 02. 1939.

## 2. О бывшем кандидате в ССП А. Карнай.

Али Карнай пишет с 1925 года. Он в первый период выпустил несколько книг. Потом перестал печататься. Насколько нам известно, в 1934 г. он подал заявление-жалобу на имя обкома.

Далее он стал работать в аппарате Башгосиздата и выпустил несколько книг на башкирском и русском языках («Инженер Николин»). Перевел несколько книг. Бывшие руководители ССП хвалили его. Надо сказать, его переводы и оригинальные произведения не отличаются особыми художественными достоинствами. Но рассказ «Огни в степи» оценен литературной общественностью положительно.

Когда Али Карнай исключили из Союза летом 1937 г. его обвинили в сочувствии контрреволюционной литературной организации «Джидиган»; на самом деле, после того, как была разоблачена эта «семерка», Карнай писал письмо Кутуеву, участнику «семерки», в котором упрекал его: зачем, де, о существовании организации не сказал ему, зачем приняли в организацию Ченакая, если бы не приняли его, не оказались бы посмешищем.

Кандидат в ССП С. Агишев заявил тогда правлению о высказываниях А. Карнай о Сталинской Конституции. По словам Агишева, Карнай сравнивал нашу Конституцию с французской и говорил: вот где демократия, там коммунисты проводят собрания, здесь – социалисты и т.д. Карнай все это отрицает. Но нет никакого основания не верить Агишеву.

В одно время А. Карнай во время вечера пьяный набросился на писателей (Салям и др.), называя их «шпионами НКВД». Писатели справедливо говорили, что он не понимает и не любит НКВД. Тов. Кудашев, Гумеров, Г. Амиров (писатели) указывали на анархические выходки Карная.

В декабре 1937 г. т. Карнай подал заявление с просьбой вернуть его в ССП. После пленума ЦК ВКП(б) вопрос о Карнае стоит в порядке дня. Наше мнение: т. Карнай исключен из ССП бывшим вражеским правлением. Карнай можно вернуть в ряды союза, нужно печатать его произведения. Нужно организовать

критику его творчества, чего до сего времени не было. Нужно ему помочь изжить недостойную гражданину СССР идеологию.

В своем заявлении Карнай не указал адреса, союз не знает его места жительства. Решать заочно мы считаем неправильным.

Секретарь Оргкомитета ССП БАССР **Ю. Гареев**. 10. 03.1938 г.

## 3. Автобиографическая справка для «Словаря советских писателей».

Карнай Али Магометович. Родился в 1904 г. 6 января по-старому стилю в д. Большие Шады Мишкинского района Баш. АССР. Родители крестьяне-бедняки. До 1919 г. жил в деревне с матерью. Братья (их было двое) работали на стороне. Отец умер когда мне было пять лет.

В 1919 г. поступил учиться в Бирский педтехникум. Учился до 1927 г. Кроме того учился в Москве и Ленинграде на кооперативных курсах Центрсоюза. В 1927 г., оставив хозяйственную работу, перешел на газетную работу и нахожусь на ней до сих пор.

Состоял членом БАПП с начала ее организации. В других организациях и группах не состоял. Сейчас кандидат в ССП. Беспартийный.

Печататься начал с 1925 г. в комсомольской газете республики. Пишу преимущественно рассказы.

**Библиография:**

«Төнгө уттар» (Ночные огни). Казань, 1928 г.

«Боролошта» (На повороте). Уфа, 1929 г.

«Аллаһыҙ ил» (Страна безбожная) – сборник антирелигиозных рассказов. Уфа, 1930 г.

«Яланда уттар» (Огни в степи), повесть. Уфа, 1932 г.

«Ишембай» (Ишембай), очерк. Уфа, 1935 г.

Уфа, Ленина, 21, кв. 1. **Карнай.**

Верно: ответственный секретарь правления ССП БАССР **Даут Юлтый.**

## 4. Обком ВКП(б) отдел Партпропаганды. 05.08.1937

**Совершенно секретно.**

Ишембаево, РК ВКП(б) т. Шныра.

По неизвестным для нас причинам в редакции газеты «Башкортостан вышкаһы» принят на работу известный своими антиобщественными поступками А. Карнай, в прошлом участник антисоветской группы в башкирской литературе.

Настоящим просим расследовать факт приема этого человека на работу и немедленно уволить его с работы. Одновременно просим поставить вопрос об утверждении всех редакционных работников обоих газет на бюро РК ВКП(б) и характеристику каждого сотрудника в ближайшее время представить в отдел Пропаганды, агитации и печати ОК.

Это мероприятие проводится во всех райкомах ВКП(б) на основе директив ЦК ВКП(б).

Зам. зав. отд. Пропаганды, агитации и печати ОК **Гужвенко.**

## 5. Открытое письмо правлению союза советских писателей Башкирии и друзьям.

При исключении меня из союза я не смог присутствовать на заседании правления и поэтому мои доводы в свою защиту остались не высказанными. Хотя с большим опозданием, но все же считаю необходимым высказаться по существу моих «грехов». Это необходимо потому, во-первых, что может быть правление найдет возможным пересмотреть вопрос об исключении меня из союза и, во-вторых, я хочу, чтобы мои товарищи, мои друзья знали, что я никогда не был контрреволюционером и всегда был искренним, прямодушным человеком, что виноват не я, а виноват кое-кто из моих обвинителей.

1. Выступая на заседании правления гражданин Шагретдинов обвинял меня в антисоветском выступлении и в сочувствии французской демократии и т.д. По этому вопросу я неоднократно давал объяснения. Мои слова о том, что «Агишев шпион Ишемгулова» были раздуты последним до невероятных размеров. Преследования Ишемгулова довели меня до того, что я на вечере в госиздате в приступе нервного расстройства накричал на Г. Салям. В этом невыдержанном поведении я виноват и только в этом. Но «история» с французской демократией не является фактом, определяющем мое мировоззрение.

Почему обвиняет меня Шагретдинов? Он обвиняет не потому, что ратует за чистоту рядов писателей; не потому что он болеет за советскую литературу. Нет! Он обвиняет потому, что я разоблачил в свое время подхалимство Шагретдинова. Некоторые товарищи знают о моем письме бывшему секретарю ОК Быкову о безобразиях в союзе. Ишемгулов и Шагретдинов не могли, конечно, забывать об этом. Кроме того я на каждом шагу разоблачал Шагретдинова как лжекритика, бездарного самозванца и отвратительного подхалима.

2. Муслимов Марат обвинял меня в том, что я в 1923 году, будучи в Бирском педтехникуме, выпускал подпольную газету. В свое время это дело рассматривалось и канткомом КСМ, и канткомом ВКП(б) и я был оправдан. В это

время я был прав потому, что, во-первых, я был официальным редактором стенной газеты; ярлык подпольщика наклеили только потому, что я не согласовал газету с секретарем ячейки Юлдашевым, он был зажимщиком критики, два раза сорвал стенгазету. Во-вторых, в этой газете вскрывались все недостатки в руководстве техникума, жульнические махинации завхоза и т.д. Я не считаю себя виновным за это дело.

Почему обвиняет меня Марат? Он обвиняет не потому, что болеет за советскую литературу. Он стал ненавидеть меня с тех пор, как я с Кулибаевым разоблачили жульнические махинации его с союзными деньгами. Когда перед пленумом СП летом 1937 г. мы проверяли финансовое состояние союза, Ягудин пытался замазывать разбазаривание союзных средств со стороны Тагирова и Марата. Таким образом, обвинение Марата основано исключительно на личной неприязни.

3. Третий из моих обвинителей С. Кудашев ставит мне в вину мои слова о том, что «здесь (т.е. в Кигинской районной газете, куда я приехал весной 1930 г.) я буду работать до тех пор, пока не вступлю в партию». Кудашев говорит, что я приехал туда с корыстной целью. Я не понимаю, как это можно называть корыстью такой поступок когда человек хочет работать в массах и доказать, что он является достойным звания большевика человеком? Такая цель была и сейчас остается.

Кудашев обвиняет меня в бродяжничестве, в том, что я, якобы ищу где лучше. Это гнусная клевета! В своем «бродяжничестве» никогда не ставил целью материальную заинтересованность. Оставлять «засиженное место» меня заставляли люди, подобные моим обвинителям. Например, после исключения меня из союза ни в одном районе Башкирии мне не давали работу. Даже выгнали из родного села и родного района! Обыватели типа Кудашева, Марата и т.д. (в районах таких людей оказалось нимало!) свои преследования довели до невозможности. Я был обречен на голод. При чем тут корысть?

Или мой «первый уход», который состоялся весной и летом 29 года. Я тогда стал трактористом. Почему? В Уфе остались прекрасные условия. Я хотел быть тогда, в разгар реконструкции сельского хозяйства, быть с массами, в гуще жизни, я хотел быть непосредственным творцом новой деревни. Ясно, что тут «искание хорошей жизни» (как это понимает Кудашев) не при чем!

Тот же Кудашев обвиняет меня за мое письмо Кутуеву. Действительно, такое письмо было написано. Но тогда еще не был вскрыт контрреволюционный характер «Джитигана» и Кутуева считал тогда другом. Я писал ему: «Считаешься другом, а о «Джитигане» не говорил. На кой черт нужен был вам этот Ченакай?».

Вот и все. С Кутуевым у меня никакой идеологической связи не было. А сам организатор «Джитигана» Кудашев осмеливается обвинять!

Таким образом, все обвинения построены на случайных фактах и они ни в коей мере не могут определить мое мировоззрение. Дело в том, что я никогда не примыкал к разнообразным «течениям», группировкам. Принципиальность, критическое отношение к явлениям действительности, ненависть ко всему пошлому, неискреннему даже в мелочах – все это стало для меня жизненной необходимостью. Такие люди вроде меня обывательщине обычно не нравятся. Человек-обыватель типа Марата, Шагретдинова и т.д. ненавидит неспокойных, «критически мыслящих» людей, потому что они нарушают его раз навсегда установленную, спокойную жизнь, противоречат его раз навсегда установленным нормам поведения.

За весь период моей литературной деятельности мною написано много плохого. Особенно плох мой первый сборник «На повороте». Но многие мои рассказы и очерки, моя практическая работа в редакциях являются фактами, доказывающими революционность моего мировоззрения. Все мои рассказы связаны с процессом социалистического строительства. Потому что душой я сам связан с идеей социализма, с идеей ленинизма.

Так в чем же дело? Дело в том, что кое-кто (Таджи, Г. Гумер) меня не понимает, а кое-кто понимает и сознательно старается оклеветать.

Поверьте, товарищи, у меня всегда была только одна цель: быть человеком созидающим, человеком прогресса и подъема.

С приветом **А Карнай.** Декабрь 1937 г.

Рукою другого человека приписано: Узбекская ССР, ст. Кассан Нихат ж.д., Кашкадарьинский округ, Пулатинское сельпо, Карнай А.М.

## 6. Оргкомитету ССП Башкирии от А. Карнай.

К вопросу об исключении меня из ССП нахожу необходимым заявить следующее.

I

Прежде всего о моих недостатках и ошибках, чисто субъективные причины которых кроются в том, что еще с молодости я не сумел воспитать в себе необходимую для каждого человека черту выдержанности, стойкости и такта. Должен сказать, что я рос в исключительных социально-бытовых условиях. Я не помню, чтобы в моей юности кто-либо обращался мною по-человечески. Не только на улице, но даже дома, даже мать избивала меня, по-видимому, злясь за беспросветную жизнь. Поэтому с малых лет я привык видеть в людях главным

образом отрицательные стороны и враждебность. В то же время мало-мальская дружба, даже чуть заметный человечный взгляд приводили меня в крайний восторг, потому что я хорошего отношения к себе видел очень редко. Я не смог воспитывать в себе *чувство меры, всегда был человеком крайностей.* Только теперь, в тридцать с лишним лет, мне пришлось себя перестраивать заново. Но до этого, на базе указанных недостатков в моей натуре, я сделал ряд ошибок. Например, письмо к Кудашеву, одному из участников «Джидигана». По-видимому, я считал этого Кутуева своим другом, а он, может быть, знать меня не хотел! Я верил в какую-то мещанскую «абсолютную» дружбу и наивно укорял его в том, что он мне не открылся как джидиганец. А потом, я тогда, когда писал это письмо, недостаточно осознал политическую подоплеку этой контрреволюционной организации. Должен признать, я поступил в данном случае по-мелкобуржуазному, по-мещански.

Так же отвратительно-обывательским был мой поступок на вечере в Башгосиздате осенью 1936 года. В пьяном виде я набросился на Саляма, эту нехорошую выходку я, наверное, всю свою жизнь не сумею изгладить из своей памяти, воспоминание об этом все время терзает душу... Но все это явилось результатом тех объективных условий, о которых надо говорить особо.

## II

Надо сказать, что объективно атмосфера в ССП Башкирии была невыносимо затхлой, одуряющей. При тагировско-ишемгуловском «руководстве» подавлялась всякая самостоятельная творческая мысль. Кажется в 1930 г. было дело – я написал рецензию на «пьесу» Тагирова «17-30» и указал на ее недостатки. Каким-то образом статья была напечатана в «Башкурдистане». С этого начались фактически мои мытарьства. Недолго спустя Шагретдинов выступил с обвинением меня в антикоммунистических настроениях. Шагретдинов писал: «Карнай в своей газетной статье выступает против коммуниста-писателя Тагирова»... И все время меня держал «под обстрелом». Никогда никто со мною по-товарищески не говорил, меня, как пишущего человека, не критиковал. А за моей спиной говорили, что «Карнай попутчик», «неблагонадежный» и т.д. Наконец, нашлась причина, по которой Ишемгулову и его сотрудникам Агишеву и Кунакбаеву стало возможным объявить меня контрреволюционером. Однажды, кажется, в беседе с Кунакбаевым, я восхвалял демократию Народного фронта во Франции. Но при донесении шефу своему Ишемгулову Агишев – или Кунакбаев) прибавили от себя, что как будто я отрицательно отзывался о Сталинской

Конституции! Я категорически заявляю, что никаких сравнений с нашей Конституцией не было!

Так же не отрицаю я и тот факт, что называл кого-то шпионом. Но опять, здесь тот же Агишев добавляет от себя: «Карнай называет Кунакбаева шпионом НКВД». А я говорил, что Кунакбаев шпионит по заданию Ишемгулова. Мои противники хотят доказать, что Карнаю-де НКВД не нравится. Такие великие человеческие чувства как любовь к кому-либо и истинности любви проверяется на деле, а не словами. Я нашему НКВД и вообще советской власти кроме полезного *ничего вредного не делал и в дальнейшем, думаю, вредным не буду!* Во всяком случае вся эта клеветническая стряпня, организованная Ишемгуловым и выполненная так блестяще Агишевым, -- она явилась причиной того, что я дошел до истерических выкриков в Госиздате в 1936 году.

Правы товарищи, которые отмечали черточки анархизма в моем поведении. Такие черточки действительно были. Причина этого кроется в той же невоспитанности, в отсутствии (по крайней мере до сих пор) большевистской закалки...

*******

В практической же газетно-журнальной работе я чувствую себя устойчивым и, кажется, мое творчество никогда не было оторванным от повседневных задач социалистического строительства и от идей большевизма вообще.

Прошу от всей души – примите меня обратно в свою среду, родную, так близкую мне среду... Уверен, что сумею оправдать доверие, если союз окажет мне его.

**А. Карнай.** 10.05.38. Уфа.

**P.S.** Кое-какие моменты, в связи с исключением меня из союза, в данном заявлении отсутствуют. Но в прежнем заявлении я останавливался во всех пунктах обвинения подробно. **А.К.**

## 7. Автобиография.

...Я написал в ЦК ВКП(б) и весною 1938 года был восстановлен в правах кандидата в члены СП.

В настоящее время работаю в Башгосиздате в качестве редактора художественной литературы.

**А. Карнай.**

## 8. Выписка из протокола Оргкомитета ССП БАССР от 12.02.1939 г.

(А. Карнай переведен из кандидата в член ССП. Председатель заседания Гареев (Юсуф Гарей), его подпись).

## 9. Автобиография.

...В настоящее время работаю собственным корреспондентом газеты «Кызыл Башкурдстан» по Абзелиловскому району.

**А. Карнай.** 26.11.40 г. Уфа.

## 10. Письмо председателю ССП БАССР Н. Карипову.

Ип. Ҡәрипов! Минең күптән әйтергә теләгән бер мәсьәлә бар. Был мәсьәлә тураһында мин «теге кешеләр» заманында бер яҙғайным, понятно, уның һөҙөмтәһе булманы. Хәҙер ҙә һөҙөмтәле булыуына ышанмайым һәм шулай ҙа әйтеп ҡалырға кәрәкле һәм быны үҙемдең бурысым һанайым.

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһында күптән түгел Хамматовтың («Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт» тураһында) мәҡәләһе сыҡты. Мәҡәлә бик дөрөҫ һәм тулыһынса урынлы. Мине бында Даян тигән кеше тураһындағы мәсьәлә ҡыҙыҡһындыра.

Даяндың үҙ ваҡытында Гәрәйҙе күктәргә күтәреп, ә Гәрәйҙең үҙ нәүбәтендә Даянды маҡтап килеүе билдәле. Таһировтар, Шәһәрҙәрҙән ҡалған ғәҙәт буйынса, Даян һәм Гәрәй «бездарный» кешеләргә ҡаршы «даровитый кешеләр»ҙән торған «могучая кучка» йәшәтеп килделәр. Гәрәйҙең революция дошманы булып НКВД тарафынан фаш ителеүенән һуң, Даян ҡапыл Гәрәйҙе «ғүмер буйына дошман күргән» кеше булып сыҡты. Һәм ул тиҙ генә үҙенә яңы покровителдәр эҙләй башланы. (Донъяла покровителһеҙ, кемгә булһа ла подхалимлыҡ итмәйенсә йәшәй алмай торған кешеләр була – Даян анна шуларҙың береһе). Ул бындай кешеләрҙе тиҙ тапты. Чанышевҡа, Мифтахҡа подлизываться итә башланы. Мифтахтың халтураһы тураһында Чанышевтың шаҡ ҡатырғыс положительный отзыв биреүенең сере бына ошонда. Бәлки, эсенән ул Д һәм М-ды һис тә яратмағандыр, фальш икәнен аңлағандыр («Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт» пьесаһы), ләкин эш ундамы ни?

Хрестоматиялар, учебниктар төҙөү монополияһы һаман да әле шул Афзал Ҡудашевтар, Даяндар ҡулында (элек Даян менән Гәрәй орудовать итәләр ине). Учебниктарға яҙыусыларҙы личный симпатия йәки антипатияларға ҡарап урынлаштыралар. Әҫәрең учебника инһен өсөн, учебник төҙөүселәрҙең подхалимы булырға кәрәк, -- ғөмүмән, бер генә эштә лә без подхалимства нельзя обходиться.

Бына был вәхши группасылыҡты, уның иң яркий представителе Даянды, союзда кешенең әҫәренә ҡарап түгел, личный характерына, натураһына ҡарап хәкөм итеү барлығын иҫтә тотоуҙы һорайым.

**А. Ҡарнай.** 07.03.41.

Артында яҙыу:

Май башында (7-8-ҙәрендә) Ҡарнайҙың үҙе менән һөйләштем. Ул: «Былай ғына, улай официаль итеп яҙманым. Һин яңылыш аңлағанһың, пүстәк ул», -- тине. Һәм бер ни ҙә талап итмәне. Мифтах әҫәре тураһындағы фекерен ҡеүәтләү менән сикләнде: «Пьеса, так сказать, между нами говоря, неважная бит», -- тине.

**Н. Ҡәрип.** 19.05.41.

## 11. Башкирский обком ВКП(б), отдел Пропаганды и агитации, письма трудящихся.

## Секретарю обкома ВКП(б) т. Вагапову. Справка о заявлении гр. Насибуллиной З.Н.

Гр. Насибуллина З.Н. из Кигинского района пишет, что дети писателя А. Карная, покончившего жизнь смоубийством, находятся у нее на воспитании и нуждаются в зимней одежде. Она просит, чтобы обком ВКП(б) соодействовал изданию книг А. Карнай и оказанию денежной помощи его детям.

(В 1947 – 1949 гг. выслано единовременное денежное пособие от ССП Башкирии всего 1950 рублей, в том числе за 1949 г. 550 р.).

Отдел пропаганды и агитации обкома ВКП(б) считает, что издавать книги А. Карнай в настоящее время нет необходимости.

Автору писма об этом дан ответ.

Зав. отделом Пропаганды и агитации обкома ВКП(б) **Носов.** 15 марта 1950 г.

## Али Карнай на войне. Статья бывшего зам. начальника Политотдела 112-ой (16-ой гвардейской) Башкирской Черниговской кавалерийской дивизии подполковника С.Р. Кадирова.

## Яҡын ҡоралдаш дуҫым

Мин Али Ҡарнай менән көтмәгәндә яҡын дуҫтар булып киттем. Бөйөк Ватан һуғышына тиклем уның күп кенә әҫәрҙәрен бик яратып уҡый инем, ләкин үҙе менән ниңәлер яҡындан таныша алманым. Билдәле булыуынса, 112-нсе Башҡорт атлы дивизияһы Дим станцияһында ойошторолдо. Дивизияның политбүлек начальнигы урынбаҫары булып хеҙмәт итә инем. Бүлек начальнигы Абдуллин иптәш беҙгә ниңәлер бик һуңлап килде. Шуға ҡарамаҫтан, политбүлек ҡарамағында башҡорт телендә хәрби газета сығарырға ҡарар итедде. Быны

партияның Башҡортостан өлкә комитеты ла хупланы. Тейешле органдан рөхсәт алғас, мин Яҙыусылар союзы председателе Сәйфи аға Ҡудашевты күреп: "Сәйфи аға, беҙ үҙебеҙҙең телдә газета сығарырға булдыҡ. Сөнки дивизия составында 99% һалдат, офицерҙар башҡорт һәм татарҙар, -- тинем. – Уларҙың күбеһе оло йәштәгеләр, урыҫ телен яҡшы белмәйҙәр. Беҙгә яҡшы редактор кәрәк", -- тип тә өҫтәнем. Сәйфи аға быны шатланып ҡаршыланы: "Сабир, мин һеҙгә бынамын тигән редактор ебәрермен", -- тине. Икенсе көндә үк, ҙур дәрт менән Рәшит Ниғмәти килеп инде лә: "Иптәш батальонный комиссар, мин үҙ теләгем менән килдем. Нимә бойорһағыҙ ҙа тулыһынса үтәргә әҙермен", -- тине. Мин Рәшит менән күптән таныш булғанға (28-30-ынсы йылдарҙа Туймазыла бергәләшеп "Ленин юлы" газетаһын сығара инек), был яңылыҡты шатланып ҡаршыланым. Һүҙ туранан-тура газета сығарыу хаҡында барҙы. Рәшит: "Бик яҡшы, маҡтаулы эш. Мин бөтә көсөм менән эшкә тотонорға әҙер", -- тине. "Тәүҙә штабҡа лейтенант Лейсинға кереп, үҙегеҙҙе рәсмиләштерегеҙ", -- тинем. Лейсин тәртип буйынса уны медосмотрға оҙатҡан. Бер аҙҙан һуң яныма санэскадрон командиры А. Сарыгин инеп: "Иптәш батальонный комиссар, һеҙ ебәргән Р. Ниғмәтуллиндың үпкәләре сирле, фронттағы ауырлыҡҡа түҙә алмаҫ", -- тип белдерҙе. Яҡын дуҫым Рәшитте кире Өфөгә ҡайтарып ебәреү, әлбиттә, бик ҡыйын булды. "Рәшит, асыуланма, фронтта төрлө саҡтар була бит, сәләмәтлегең самалы. Һин бында ла һалдат, Ватанға ҙур ярҙам итә алаһың", -- тип, Өфөгәсә оҙата килдем уны. Был юлы Сәйфи ағаға кереп тормай, Башвоенкоматтың политбүлегенә киттем, редактор булырлыҡ кеше табып ебәреүҙәрен һораным. Урамға сығып күп тә барманым, "иптәш Ҡадиров!" тип кемдер өндәште, әйләнеп ҡараһам – Али Ҡарнай. Ғәҙәттән тыш асыҡ йөҙ, күтәренке тауыш, шатлыҡ менән: "Яңы ғына Рәшитте күрҙем. Ул һеҙгә бик үпкәләгән, мине дивизияға алманылар, ти. Мине алығыҙ, сәләмәтмен. Фронтҡа китеү хаҡында ике ғариза бирҙем, ләкин һаман саҡыртмайҙар, бына әле лә тап шул хаҡта военкоматҡа китеп барам", -- тип белдерҙе. Был мине шатландырҙы. Бергәләп Башвоенкоматҡа индек, уның ғаризаларын таптылар. Шунда уҡ минең һорау ҙа, Алиҙың теләге лә ҡәнәғәтләндерелде.

1941 йылдың декабрендә Али Ҡарнай Дим станцияһында миңә Яҙыусылар союзының рекомендацияһын тапшырҙы. Мин уны политбүлектең газета сығарыу тураһындағы ҡарары менән таныштырҙым. Уның күҙҙәрендә шатлыҡ саҡҡылары сағылды: "Бик һәйбәт, бик һәйбәт. Ышанығыҙ, эшләйбеҙ уны!" – тине. Һәм ул эшкә сумды. Күп тә үтмәй, үҙенә ярҙамсылар ҙа тапҡан -- әҙәби бүлек буйынса Шакиров Насир, газета секретаре Әхтәм Ихсан, наборщиктарҙан Х. Хәйерова һәм Ф. Фәтҡуллиналар. Бөтәһен ҡабул иттек. 10 көн эсендә партияның өлкә комитеты (Буренкин) ярҙамында Али Димгә газетаны баҫтырыу машинаһы, шрифттар алып килде. Өҫтәүенә, ике айға етерлек ҡағыҙ ҙа тапҡан. Аптырап ҡалыуымды күреп, ул: "Иптәш батальонный комиссар, миңә өлкә газеталары редакторҙары ныҡ ярҙам итте. Ни теләһәм, шуны бирәләр", -- тине. Ысынлап та шулай ине. Дивизияны ойоштороуҙа республиканың бөтөн халҡы ысын күңелдән ярҙам итте, иң ышаныслы улдарын унда ебәрҙе. 11 көн эсендә газетаның беренсе номерын сығарырға тулыһынса әҙер икәнен хәбәр итеп, Али: "Иптәш батальонный

комиссар, газетаға ниндәй исем бирәбеҙ?”—тип һораны. Янибыҙға дивизияның комиссары М. Нәзиров ингәйне. Бергәләшеп һөйләшкәс, Ҡарнай тәҡдиме буйынса ҡуштыҡ: “Ҡыҙыл атлылар”.

Дивизияның героик тарихында “Ҡыҙыл атлылар” онотолмаҫ шөһрәт ҡаҙанды. Һуғыштағы һәр бер батырҙы, уның эске хистәрен, фашистарҙы күрә алмауын, Ватанға, партиябыҙға ысын күңелдән бирелгәнлеген, шул юлда үҙен ҡорбан итергә әҙер икәнлеген тасуирлап торҙо газета. Али һәр көн һуғыштың алғы һыҙығында булды. Һәр бер полкта, эскадронда кәрәкле хәбәрселәр әҙерләне, уларҙы үҫтерҙе. Һәр юлы уны һуғыштың ауыр урындарында осратаһың. Үҙен тирәләп алған һалдаттарҙы, офицерҙарҙы күрәһең.

1943 йылдың июль айҙары. Көтмәгәндә ул Өфөнән һөйөклө бисәһененең үлеү хәбәрен ала. “Берҙән-бер улым йәтим ҡалған”, -- тип тәрән ҡайғыға бата, бөтәһен бик ауыр кисерә. Шул уҡ ваҡытта ҡаты ауырып китә. Санэскадронға барырға ҡушылһа ла, бармай, хеҙмәтен дауам итә. Алавка тигән утарҙа Әхтәм Ихсанов менән кескенә бер бүлмәлә йәшәйҙәр. Дивизия алдағы һуғыштар өсөн ҙур әҙерлек алып бара...

Бер көн иртән Али, төҫө ҡасҡан хәлдә, политбүлеккә инеп, китель кеҫәһенән партбилеты юғалғанлығын әйтә. Ауырыуы өҫтәлә. Икенсе көндә газетаның баш мәҡәләһендә “Сталин стратегияһы” тигән һүҙҙәр “Сталин трагедияһы” тип баҫылған. Мин газетаның главлиты инем, ләкин ул көндә корпуста кәңәшмәлә инем.

Ул былай була: Ҡарнай ауырып ятҡанда Ә. Ихсанов газетаның нәүбәттәге номерын (контроль экземпляр) уға уҡып сыға. Ҡарнай газетаны баҫып сығарырға рөхсәт итә...

Ҡайтып төшөүем менән Барый Сөйәрғәлиев (политбүлек секретаре) миңә пакет бирә. Унда газетаның шул номеры, юғарыла әйтелгән һүҙҙәр аҫтына ҡыҙыл ҡәләм менән һыҙылған.

Бөтә тиражды йыйып алырға ҡуштым (бер генә полкка ебәреп өлгөргәйнеләр), ләкин 22 данаһы табылманы. Был хәлдәрҙе тикшереп, Ҡарнайға шелтә биреп, яңы партбилет тапшырырға, тип ҡарар иттек. Әммә икенсе көндә үк Степной фронттың политбүлек начальнигы генерал Мехлис (уҫал, үҙһүҙле кеше) Алиҙы үҙенә саҡырта. Ул беҙҙең рөхсәт менән аҙыҡтар алып (65-70 саҡрым юл), атҡа атланып, коневоды менән бергә йүнәлә. Мехлис уны ҡабул итә. Оҙаҡ ороша, ә ҡулында кемдер тарафынан яҙылған хат һәм “Ҡыҙыл атлылар” газетаһының баяғы номеры...

Бер аҙҙан һуң Али Ҡарнай һәм коневоды дивизияға ҡайтырға юлға сыға. 15 саҡрымдай үткәс, аттарҙы ашатып, эсереп алайыҡ тип, тәбиғәттең бик матур бер урынында туҡтайҙар. Кескенә йылға аға. Газета ҡағыҙына төрөп өс тапҡыр махорка тарта Али. Көтмәгәндә, үҙен-үҙе ата. Был хәл беҙҙең өсөн ҡурҡыныс та, ҙур юғалтыу ҙа булды. Беҙ уны матурлап күмдек.

Али Ҡарнайҙың асыҡ йөҙө, саф күңеле, баҫалҡылығы, эш һөйөүсәнлеге бөгөн дә беҙҙең хәтерҙә. Беҙҙә ул онотолмаҫлыҡ тәрән эҙ ҡалдырҙы. “Ҡыҙыл атлылар” газетаһы дивизияла ғына түгел, бөтә корпуста (башҡа дивизияларҙа ла башҡорт һәм татарҙар бар ине), хатта беҙ беркетелгән армияла ла шөһрәт

ҡаҙанды, уны яратып уҡынылар. Газетаның күп номерҙарында А. Ҡарнайҙың үҙ очерктары, шиғырҙары күп баҫыла ине. Ул һәр ваҡыт Башҡортостан өлкә газеталары менән тығыҙ бәйләнештә булды. Уларҙа дивизияның героик хәрәкәте хаҡында мәҡәләләр баҫыла торҙо (“Беренсе удар” һ.б.).

Дивизия дошман тылынан сыҡҡас (24.02.1943), ул минең һәм штаб началинигы И.И. Голенев ярҙамында рейд хаҡында күләмле әҫәр яҙҙы. Шул турала ул миңә: “Өфөгә оҙаттым”, -- тине. Ләкин ул әҫәр ниңәлер һаман донъяға сыҡмай, беҙ уны көтәбеҙ...

**С. Р. Ҡадиров.** 15.01.1974.

Так рано и трагически завершилась неспокойная жизнь талантилового писателя, принципиального и честнейщего человека Али Карная.

25.01.2017.

## Йөкмәткеһе:


Рәмигә 85

Рафаэльгә 85

Илшатҡа 85

Эҙәрлекләнгән әҙип

Али Ҡарнай (документтар)